ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

9-15 декабрь (аҡъюлай) 2023

№48 (1090)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Улар башҡорт мәктәбендә уҡыны!



5

Туған мөхитендә тәрбиәләнгәндәр...

бәхетле бала саҡ илендә йәшәүселәр улар!



8-9

Сыйырға сәлам сәлгәндә...

йәки "Сөйләш" фестиваль-марафоны тураһында



10

Баластарҙа - быуаттар тарихы



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

**АРЗАНҒА ЯҘЫЛЫП ҠАЛ!**

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4-14 декабрҙәге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында 2024 йылдың тәүге яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡ менән 750 һум 84 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә дәррәү генә яҙылып, уҡыуҙан туҡтамаған, фекерле, аңлы, ғәмле, вайымлы милләттәштәр иҫәбен ишәйтәйек!*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Һеҙҙең йәш быуында телһөйәрлек тәрбиәләү һабаҡтары, алымдары, саралары ниндәйерәк, тәжрибәгеҙ менән уртаҡлашығыҙ әле...

***Фәйзрахман ШӘЙӘХМӘТОВ, биш ейән, дүрт ейәнсәр, ике бүләсәр ҡартатаһы, Белорет районы:*** Балаларҙың бөтәһе лә ситкә таралып, Өфө, Магнитогорск, Белорет ҡалаларында төпләнде, беҙ әбейем менән ғүмер буйы төйәк иткән ауылыбыҙҙа йәшәйбеҙ, мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрайбыҙ, баҡса үҫтерәбеҙ - эш етерлек, ләкин быға ҡыуанабыҙ ғына: һаулыҡ булһа, йорт-хужалыҡ эштәре йәнтәнеңә кинәнес кенә бит ул. Ҡыш ҡар көрәүҙән башҡа әллә ни эш тә юҡ, күберәк йоҡо баҫа, шуға күрә йәй осорон әле үк һағынып көтә башлайбыҙ, сөнки йәй эш осоро ғына түгел беҙҙең өсөн ҡышҡы тынлыҡтан уяныу мәле лә.

Йәйге каникул етһә, өйөбөҙ балалар тауышынан яңғырап, гөрләп китә: ҡаланан ейән-ейәнсәрҙәр килеп тула. Йәй беҙҙә тормош ҡайнай: баҡса тәрбиәләү, еләк-емешкә, бәшмәккә йөрөү, бесән эшләү... Һәм был эштәрҙең иң уртаһында - ейән-ейәнсәрҙәр. Беҙҙә саҡта мин уларға тик башҡортса һөйләшеүҙе шарт итеп ҡуйғанмын, минең был шартты улар күптән белә һәм шуға әҙерлекле киләләр. Башҡортса белмәһәгеҙ, кире ҡайтарып ебәрәм, тип тә иҫкәртеп үк ҡуям, ә был улар өсөн һәләкәткә тиң. Килгәс тә һәр береһен өләсәләре менән икебеҙҙең алдыбыҙға баҫтырып ҡуйып, уҡыу йылы буйына ниндәй уңыштары, нисек өлгәшеүҙәре, яратҡан дәрестәре, уҡытыусылары, класташтары хаҡында ентекләп һөйләтеп алабыҙ һәм тик башҡортса матур итеп һөйләргә ҡушабыҙ. Өләсәләре оҙаҡ йылдар мәктәптә башҡорт теленән уҡытты, аҙаҡ балалар баҡсаһында эшләп, хаҡлы ялға сыҡты, шуға ла уның балалар менән эш тәжрибәһе бай.

Ейән-ейәнсәрҙәр беҙгә йорт-хужалыҡ эштәрендә көстәренән килгәнсә ярҙам итә, тик беҙ эш мәлен ялҡып, арып китмәҫлек итеп ойошторабыҙ. Мәҫәлән, әйләнә-тирәлә ниндәй әйбер, йорт хайуандары, ҡош-ҡорт, ағас, сәскә, үҫемлек, бөжәк кеүек нәмәләр күрә, шуның башҡортса атамаһын әйтеү буйынса тиҙ генә ярыш ойоштороп алабыҙ. Белмәгәндәрен онотмаҫлыҡ итеп ятлатабыҙ. Бер аҙ ваҡыттан ҡабатлап һорап ҡуябыҙ: һабаҡты ныҡытып тороу кәрәк, ти өләсәләре. Ҡалаларына ҡайтып китҡәс тә оноторлоҡ булмаһын. Беҙҙең ауыл иҫ киткес гүзәл тәбиғәт ҡосағында ултыра, Ағиҙелдең үр яғын һыулай, малайҙар менән балыҡ ҡармаҡларға ла ваҡыт табабыҙ. Алыҫтан Ирәмәл күгәреп күренә. Балаларға уларҙың атай-әсәйҙәре тыуып үҫкән, үҙҙәре лә ылығып, тартылып торған ошо ауылдың ер-һыу тарихын һөйләйем, атамаларын иҫтәрендә ҡалдыртырға тырышам. Быларҙан тыш, өләсәләре әллә күпме йомаҡ, мәҡәл, әйтемдәр әҙерләп ҡуя. Мәҡәлдәрҙе үҙебеҙҙең тормош-көнкүрешкә бәйләп, мәғәнәләрен аңлатып бирә. Кис етһә, бөтәбеҙ өҫтәл тирәләй ултырып, башҡорт яҙыусыларының ҡыҙыҡлы әҫәрҙәрен уҡыйбыҙ. Көн һайын сиратлашып бирәү ҡысҡырып уҡый, был балаларҙың телмәрен шымартырға, һүҙ байлыҡтарын арттырырға ярҙам итә. Ҡалала йәшәүсе ейәндәре булған башҡа ҡартатай-өләсәйҙәргә улар менән ватаемерә русса һөйләшеп, кеше көлдөргәнсе, бына үҙебеҙҙең ошо ысулды ҡулланып ҡарарға тәҡдим итәм: балаларҙы башҡортса өйрәтеүҙең бик файҙалы һәм ышаныслы юлы ул, үҙ тәжрибәмдән беләм!

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ҮҘ ЮҒАРЫЛЫҒЫ БАР




**Баш ҡалала йәшәйем. Буш ваҡытымда китапханаға барып, гәзит-журнал уҡырға яратам. Үҙемә оҡшаған һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм хатта мәҡәләләрҙе ҡуйын дәфтәренә күсереп алам. Беләм, бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда был сәйер кеүек тойола, ләкин миңә был шөғөл бик оҡшай.**

(Дауамы 2-се биттә).

## КӨН ТЕМАҺЫ

# КЕШЕНЕ КЕШЕ ИТӘ...

## туған теле

**XIX быуатта йәшәгән күренекле философ Фридрих Энгельс "Ғаиләнең, шәхси милекселектең һәм дәүләттең килеп сығышы" исемле киң билдәле хеҙмәтендә кешене хеҙмәт кеше иткән, тигән һығымтаға килә. Бөгөн беҙ, философ фекерен инҡар итмәйенсә, кешене туған теле кеше иткән, тип һис шикләнмәйенсә әйтә алабыҙ. Ысынлап та, донъя халыҡтары телдәре - кешелек үҫешенең асыҡтан-асыҡ сағылышы, уның иҫ киткес рухи-мәҙәни мираҫы һәм оло байлығы ул.**

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✓ *Әгәр ҙә балаларҙың 70 проценттан аҙырағы ғына туған телен өйрәнә икән, ошо халыҡ теле хәүефле зонала булып сыға. Беҙҙең башҡорт теле лә ошо зоналағы телдәр исемлегенә индерелде.*



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*



# ҮҘ ЮҒАРЫЛЫҒЫ БАР

(Башы 1-се биттә).

Бигерәк тә бер тупланмаға йыйылған гәзиттәрҙе алып уҡырға яратам, элекке һандарын да алып ҡараштырам. Минеңсә, бөгөнгө заман ваҡытлы матбуғаты яңылыҡтар еткереүсе булыуҙан туҡтап (әйткәндәй, уларҙың күбеһе интернет киңлектәрендә әллә ҡасан уҡылған була), ул хәбәрҙәрҙе анализлаусы, төрлө яҡлап өйрәнеүсе, һығымта эшләүсе һәм үҙ уҡыусыһына еткереүсе ролендә булырға тейеш.

Үҙем яратып уҡыған "Киске Өфө" нәҡ ошондай баҫмаларҙың береһе. Уның биттәрендә баҫылған хәбәр "булды, үтте, һөйләнеләр, әйттеләр" тигән ҡалыпта бирелмәй. "Киске Өфө" хәбәрселәре теге йәки был ваҡиғаның ни өсөн ошолай булғанлығына, бының ниндәй эҙемтәләргә килтереү мөмкинлегенә, хәлдәр артабан ниндәй юҫыҡта үҫешеүенә һәм башҡа мөһим аспекттарға ҙур иғтибар биреүе менән алдыра. Бына ниндәй сифаты менән оҡшай миңә был баҫма.

"Киске Өфө" йәмғиәттә күптән үҙенең ныҡлы урынын тапҡан гәзит һәм ошо юғарылыҡтан төшмәй. Гәзит уҡыусыларҙы йәлеп итеү маҡсатында ниндәйҙер мәғәнәһеҙ әйбер баҫтырмай, бәхәс тыуҙырған мәлдәрҙе лә абруйлы итеп бирә белә, бер кемдең дә намыҫына теймәй һәм бысраҡлыҡҡа юл ҡуймай. Бик баһалы һәм маҡтаулы был күренеш.

Еңел булмаған заманда йәшәйбеҙ, шомло хәбәрҙәр ҙә йыш була, негатив күп ҡуйыртыла. Ә "Киске Өфө" биттәрендә баҫылған мәҡәләләр үҙ уҡыусыһының күңеленә матур өмөт саткылары һала алыуы менән оҡшай. Кешене өмөт йәшәтә, ә ошо өмөттө юҡҡа сығарырға бер ауыҙ һүҙ ҙә етә. Күп кенә ваҡытлы баҫмалар уҡыусыһы күңелен уйламай, теге йәки был хәбәрҙең иң ҡурҡыныс һәм ауыр мәлен яҙа. "Киске Өфө"гә был хас түгел. Уның биттәрендә ниндәй ауыр хәл-ваҡиға тураһында уҡығанда ла, барыһы ла яҡшы буласағына ышаныс ҡала.

Гәзиттең тағы ла иң оҡшаған рубрикаһы - халыҡ дауалары тураһында. "Дауа аяҡ аҫтында", тигән атай-олатайҙар. Ысынлап та, бай тәбиғәтле төйәгебеҙҙең файҙалы үләндәрен дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәтеүегеҙ үтә лә шәп. Артабан да был рубриканы һүндермәй генә алып барығыҙ, тип әйткем килә.

Һүҙемде йомғаҡлап, нимә әйткем килә? Ваҡытында гәзит-журналдар халыҡтың иң яҡын дуҫы, кәңәшсеһе булған. Почтальондарҙың сумкаларына көстәре етмәйенсә гәзит таратып йөрөүҙәре иҫемдә. Өләсәйем менән олатайымдың киске эштәрен тамамлап, йәнәш ултырып гәзит-журнал уҡыуҙары, унан фекер алышыуҙары ла матур иҫтәлек булып күңелемдә һаҡлана. Ҡағыҙ баҫма бер ҡасан да юғалмаясаҡ икәнлегенә ышанам һәм һәр баҫмаға уңышлы эшмәкәрлек теләйем.

**Сәүҙә ИБРАҺИМОВА.**

*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

# КЕШЕНЕ КЕШЕ ИТӘ...

## туған теле

(Башы 1-се биттә).

Иң ҙурҙарҙан һаналған Ethnologue телдәр каталогы мәғлүмәттәренә ярашлы, 2022 йылда донъяла барлығы 142 тел ғаиләһенә ҡараған 5500 тел булған икән. Тик шуныһы: ЮНЕСКО-ның "Бөтөү хәүефе янаған донъя телдәре атласы"на ярашлы, хәҙерге осорҙа тик Европала ғына 50-гә яҡын тел ошо исемлеккә индерелгән, а барса донъя кимәлендә 400-ҙән ашыу халыҡ теле юҡҡа сығып барыусы тел статусына дусар булған. Теге йәки был телдең яҙмышын билдәләү өсөн белгестәр ышанyслы тип иҫәпләгән бер күрһәткес бар: әгәр ҙә балаларҙың 70 проценттан аҙырағы ғына туған телен өйрәнә икән, ошо халыҡ теле хәүефле зонала булып сыға. Ҡыҙғанысҡа күрә, һуңғы осорҙа беҙҙең башҡорт теле лә, беҙ быны һис теләмәһәк тә, ошо зоналағы телдәр исемлегенә индерелде.

Был аяныслы хәлдең ижтимағи-сәйәси сәбәптәре һәм туған телебеҙ яҙмышы хаҡында күп һөйләнелде, гәзит-журналдарҙа яҙылды, радио һәм телевидениенан ғалимдар, яҙыусылар, шағирҙар сығыш яһаны, ҡоролтайҙарҙа резолюциялар ҡабул ителде, ахыр сиктә, байтаҡ халыҡ йыйылған митинг та уҙғарылды. Ошо киҫкен мәсьәлә буйынса дәүләт органдары ла билдәле бер ҡарарҙар ҡабул итте, телебеҙ мөхитендә бер ни тиклем әүҙемлек тойолғандай булды: "Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм БР халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү" тип нарыҡланған дәүләт программаһы ҡабул ителде, гранттар булдырылды һ.б. Уҡыусыларыбыҙҙың иҫенә төшөрәм: ошондай




әүҙемлек 2018 йылда башланғайны. 5 йыл ваҡыт уҙып китте. Һөҙөмтәләр ниндәй һуң? Әллә ни маҡтанырлыҡ түгел шул. Ни өсөн шундай күңелһеҙерәк һығымтаға киленде?

Бына ҡарағыҙ: барса башҡорт балаларының нисә проценты туған телендә иркен аралаша, грамоталы уҡый-яҙа, уҡыусылар кимәлендә булһа ла ижад итә ала, иң мөһиме - үҙ халҡының телен йөрәгенә, аңына һәм үҙаңына һалған, башҡорт гәзит-журналдарын, китаптарын уҡый, үҙ те-

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

### *Һеҙҙең йәш быуында телһөйәрлек тәрбиәләү һабаҡтары, алымдары, саралары ниндәйерәк, тәжрибәгеҙ менән уртаҡлашығыҙ әле...*

***Рәйсә ҠУНАЕВА, Сибай ҡалаһының Тыуған яҡты өйрәнеү модель китапханаһы мөдире:*** Беҙҙең китапхананың төп маҡсаттарының береһе - уҡыусыларыбыҙҙа туған телгә һөйөү уятыу. Был бурыс беҙҙең учреждениеның атамаһы - статусына ла һалынған - Тыуған яҡты өйрәнеү китапханаһы; ә тыуған яҡ - ул тыуған ауыл-ҡалабыҙ, тыуып-үҫкән йортобоҙ, ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле атай-әсәбеҙ, өләсәй-ҡартатайҙарыбыҙ - тимәк, туған телебеҙ, тигән һүҙ. Шуға күрә лә китапханабыҙҙа үткәрелгән яҙыусылар, матбуғат хеҙмәткәрҙәре менән осрашыуҙар, яңы китаптарҙың исем туйы, хәтер кисәләре, конкурс һәм викториналар башҡорт телендә алып барыла. Бигерәк тә балаларҙың үҙ телебеҙҙә шиғырҙар ятлауы, проза әҫәрҙәренән өҙөктәр һөйләүе күңелгә яҡын, сөнки уларҙың таҙа, саф башҡортса һөйләшеп үҫеүендә үҙебеҙҙең дә хеҙмәт өлөшөн күреү телебеҙҙең киләсәгенә өмөттәр уята, китапхана эшенең кәрәклеген тойорға ярҙам итә. Яҙыусыларҙы ла алыҫтан саҡырырға түгел, беҙҙең төбәк ижад кешеләренә бай: үҙебеҙҙең шағирҙар, прозаиктар, драматургтарыбыҙ бар. Яңыраҡ ҡына әле билдәле әҙип, яугир, ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләгән Әмир Моратовтың ижадына арналған хәтер кисәһе, журналистика ветераны, һөнәре буйынса тау инженеры Фәрит Әхмәров һәм шағир Фәнис Сирбаев, драматург Әминә Яхина, ҡобайырсы Фәрҙиә Юнысова менән осрашыуҙар булып үтте.

Сибай мәктәптәре менән генә түгел, балалар баҡсалары менән дә тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Китапханабыҙға яҡындағы "Әкиәт" һәм "Ҡурай" балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре беҙҙең йыш һәм ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ.

Тыуған яҡты өйрәнеү, башҡорт телен һаҡлау буйынса быйыл бик күп файҙалы саралар үткәрелде китапханабыҙҙа. "КитапТирмә" проектыбыҙ Президент гранттары фонды конкурсында еңеүсе булды. Дөйөм бюджет 677 885 һум тәшкил итте. Проектты ғәмәлгә ашырыу ошо йылдың сентябрендә башланды һәм ул 2024 йылдың мартына тиклем дауам итәсәк. Проектты тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә "Сәсән тирмәһе" мөйөшө "Китап Тирмә" экспозицияһына урынлаштырылды һәм уның менән бөтә теләгән уҡыусыларыбыҙ ҙа файҙалана ала. Балалар беҙҙә шиғыр һөйләү, йырҙар йырлау менән генә сикләнмәй, улар менән тыуған яҡты өйрәнеү буйынса теоретик һәм ғәмәли оҫталыҡҡа дәрестәр ҙә алып барабыҙ. Был проект башҡорт халҡының йолаларын, көнкүреш һәм мәҙәни мираҫын ентекләп өйрәнеүгә, һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән, шуның менән бергә ул телебеҙҙе байытыуға ла булышлыҡ итә. Балалар боронғо һүҙ һәм терминдарҙы аҫалы балаҫтар, халыҡ көнкүрешендә ҡулланылған йыһаздар, уҡ-һаҙаҡ һәм башҡа экспонаттарҙы ҡарап та иҫтәрендә ҡалдыра, сөнки беҙгә йыш экскурсияға килергә яраталар. Тирмәбеҙ эсендә ултырып, башҡорт телендәге матур, төҫлө китаптар уҡырға яраталар. Башҡорт теленә ихтирам китапханабыҙ ишеген асып ингәс тә башлана: балалар ҙа, йәштәр ҙә, ололар ҙа беҙҙең менән һәм үҙ-ара башҡортса сәләмләшә һәм фәҡәт туған телдә аралаша, сөнки бында беҙ шундай мөхит тыуҙырғанбыҙ. Шулай уҡ китапханала мәктәпкәсә йәштәге кескәйҙәргә башҡорт телен өйрәнеү дәрестәре лә алып барабыҙ - буласаҡ уҡыусыларыбыҙҙы бәләкәйҙән әҙерләйбеҙ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 290 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 246 пациент, шул иҫәптән 161 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 3787 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 1588-е - 60 йәште үткән.

✓Владимир Путиндың тура бәйләнеше һәм матбуғат конференцияһы 14 декабрҙә буласаҡ. Дәүләт башлығының матбуғат секретары Дмитрий Песков хәбәр итеүенсә, махсус йыһазландырылған студияға киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре - Рәсәй төбәктәренән, шулай уҡ федераль журналистар, Мәскәүҙә аккредитацияланған сит ил журналистары саҡырылған. 1 декабрҙән халыҡтан тура бәйләнешкә һорауҙар ҡабул ителә башлаған. 8-800-200-40-40 номерына бушлай шылтыратырға; 0-40-40 номерына бушлай СМС ебәрергә; moskva-putinu.ru сайты аша; "ВКонтакте", "Одноклассники" социаль селтәрҙәрендә; мобиль ҡушымталар аша.

✓Махсус хәрби операция зонаһында эшләгән Башҡортостан журналистары страховкаланмаған. Улар үҙ ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуя, әммә страховка компаниялары уларҙы страховкалауҙан баш тарта. Был проблема хаҡында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировҡа "тура бәйләнеш" тә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы Азат Саҙрыев хәбәр итте. Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәте аппаратына хәрби хәбәрсе статусын билдәләргә ҡушты. "Журналистарҙы страховкалау мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Улар күп түгел, ун кеше", - тине Радий Хәбиров.

✓Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы Юлай Ильясов үҙ теләге менән махсус хәрби операция зонаһына китергә ҡарар иткән. "Тура бәйләнеш" барышында: "Юлай Талха улы контракт төҙөп, доброволец булып китә. Ул шундай ауыр ҡарар ҡабул иткән. Командамда лайыҡлы кешеләр эшләй", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп хакимиәт башлығының финанстар буйынса беренсе урынбаҫары Азамат Сәйфуллин тәғәйенләнде.

✓Күмертау хакимиәте башлығы Олег Фролов отставкаға китте. Социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ул әүҙем тормош позицияһы, иғтибарҙан ситтә ҡалмаған проблемалар өсөн ҡала халҡына рәхмәт белдерҙе. Хәҙер Күмертау хакимиәте башлығы вазифаһын бынан алда ҡала советы рәйесе булып эшләгән Олег Астахов башҡара.

✓ ***Телһеҙ кешегә халыҡ элек-электән бер зәғиферәк зат итеп ҡараған. Ундай кешеләр элек тә булған, хәҙер ҙә бар. Телһеҙ халыҡ буламы һуң?***



ленә өҫтөнлөк бирә? Бөтөнөһөнөң 50 проценты тиһәм, бер кем дә ышанмаҫ. 25 проценты тиһәм дә күберәктер. Ә донъя лингвистарының әлеге 70 процент тигән күрһәткесе менән сағыштырһаҡ, уйылып китерлек. Туған телебеҙ яҙмышын бер нисек тә насарға юрағы килмәй, әммә ошо аяуһыҙ көрсөктән сыға алыу юлдары тураһында беҙҙең һәр беребеҙгә уйланырға кәрәк.

Телебеҙҙе нисек ҡурсаларға һуң, уны ни рәүешле түкмәй-сәсмәй киләсәк быуындарға тапшырырға?

Иң элгәре үҙебеҙҙең дә, балаларыбыҙҙың да телебеҙгә ҡарата күнегеп кителгән битарафлығынан арыныу зарур. Бала теле ғаиләлә асыла, ғаилә теленең башҡорт теле булыуы мотлаҡ. Ә байтағыбыҙ ошо ябай ғына ҡағиҙәне үтәмәй хәҙер. Бигерәк тә ҡала башҡорттары ғаиләләрендә, хатта 3 йәшкә тиклем бала башҡортса һөйләшә башлаған хәлдә лә, балалар баҡсаһының бер телле - рус телле булыуы арҡаһында ата-әсәләр ғаиләлә балалары менән үҙҙәре лә русса аралаша башлай. Торабара бала элегерәк белгән башҡорт һүҙҙәрен онота һәм унан баш тарта. Беҙгә, башҡорттарға, ошондай финал ҡулаймы?

Икенсенән, һәр башҡорт ғаиләһендә башҡорт гәзит-журналдары, башҡорт телендә нәшер ителгән китаптар булыуы фарыз. Бигерәк тә махсус рәүештә балаларға тәғәйенләнгәндәре. Беҙ хәҙер кистәрен балаларға үҙ телебеҙҙә әкиәт һөйләйбеҙме, китаптар тотоп, балаларыбыҙҙы янымыҙға ултыртып, бәләкәй генә хикәйәләр, шиғырҙар уҡыйбыҙмы? Йомаҡтар әйтешеп, ярышабыҙмы? Өйөбөҙҙә ғаилә китапханаһы (бәләкәйерәк булһа ла) бармы һуң? Беҙ хәҙер күп йылдар буйы хат яҙышмайбыҙ - кәрәге юҡ, тибеҙ. Гәзит-журналдарға яҙылмайбыҙ, китаптар һатып алмайбыҙ. Уларҙың да кәрәге бөттөмө ни? Улай булһа, киләсәктә телебеҙ ҙә һис бер кемгә кәрәк булмаҫ бит! Әйтелгәндәр бар замандаштарыбыҙға ла ҡағылмай - ауылдарыбыҙҙа ла, ҡалаларҙа ла балаларын саф башҡортса тәрбиәләп үҫтергән ғаиләләр юҡ түгел, әммә үтә һирәк шул.

Өсөнсөнән, тел бушлыҡта йәшәмәй, ул халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, йыр-бейеү сәнғәте, милли кейем-һалымы, аш-һыуы һәм башҡа милли булмышы күренештәре менән бер уртаҡ мөхиттә бар булған һәм үҫешкән. Тимәк, бына ошо мөхиткә балаларыбыҙҙы ылыҡтыра алыу кәрәк. Музейҙар, концерт-театр залдары, төрлө күргәҙмәләр, мәҙәни саралар - улар тик ололар өсөн генә түгел, уларға балалар менән бергәләп йөрөһәк, уңырбыҙ. Хәҙер башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары заманында онотолоп бөтөп барған милли кейем тегеү менән мауығып китте һәм, уны бар халыҡҡа күрһәтеп, байрамдарға, клубтарға, концерт залдарына кейеп килә. Бик шәп бит! Балаларына ла тегеп кейҙереүселәр бар. Шул кейемдәр тураһында, һәр бер детален башҡортса атап әйтеп, балала телгә ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу уятып була.

Һуңғы ваҡытта башҡорт милли брендтары, йәғни, халҡыбыҙға ғына хас булған, милли мираҫыбыҙ һәм ҡаҙаныштарыбыҙ исемлегенә ингән әйберҙәр ҡанунлаштырылып, хатта заманса төҫ ала, көнитмешебеҙгә көслө йоғонто яһай башланы. Башҡорт ҡурайы, башҡорт ҡымыҙы, башҡорт аты, башҡорт һабантуйы, башҡорт балаларының уйындары һәм башҡа шундай миллилек менән тулы әйберҙәр һәм күренештәр хаҡында балалар менән әллә күпме йәнле әңгәмәләр ҡороп була бит. Башҡорт брендтары хаҡында русса һөйләп тормабыҙ ҙа инде! Аңлап етмәйҙәр икән, шул саҡта ғына рус теленә мөрәжәғәт итеп була. Мин һанап үткән нәмәләр - балаларыбыҙҙы башҡортса һөйләп, башҡорт терминдарын ҡулланып ылыҡтыра, ҡыҙыҡһындыра ала торғандарҙың меңдән бере генә ул.

Дүртенсенән, быныһы үтә лә мөһим, мөмкин булғанса, балаларҙы башҡорт балалар баҡсаларына, мәктәптәренә, улары юҡ икән, башҡорт кластарын астырып, шунда тәрбиәгә биреү зарур. Һеҙ нисек кенә белемле булһағыҙ ҙа, балағыҙҙы үҙегеҙ генә системалы рәүештә башҡорт яҙма теленә һәм әҙәбиәтенә өйрәтә алмаясаҡһығыҙ. Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа милли мәктәптәр асылмай башланы, был әлегә хәл ителмәй килгән проблема. Барыбер, берләшеп-бергәләшеп, властар алдында ошо мәсьәләне ҡуҙғатып тороп, законлы талаптар ҡуя алабыҙ. Ошо йәһәттән тағы бер тәкдим бар - башҡорт теленә бик аҙ сәғәттәр бирелгәнлектән - уны тейешле кимәлдә өйрәнә алырлыҡ башҡа шарттар менән тәьмин итеүҙе мәктәп етәкселәренән талап итергә кәрәк. Ҡыҙғаныс, беҙҙең бәғзе бер түрәләребеҙ ҙә, хатта мәғариф өлкәһендә эшләүселәр ҙә, ике һәм күп теллелектең (билингвизм һәм полилингвизм) бала зиһенен үҫтереү һәм камиллаштырыу йәһәтенән алыштырғыһыҙ бер дидактик принцип булыуын әлегәсә аңлап етмәй.

Әүәлерәк оло әбей-бабайҙар ейәнейәнсәрҙәренә ошондай бер изге теләк теләрҙәр ине: "Хоҙай Тәғәлә тел асҡыстары бирһен инде балабыҙға". Ниндәй фәһемле, ниндәй тәрән асыллы образ - тел асҡыстары! Физиология-психология тигән фәндәр хаҡында бер ни белмәһәләр ҙә, туған телебеҙҙең әҙәм балаһының зиһен-аҡылы, шәхес үҫеше өсөн күҙгә күренмәҫ бер сихри асҡыс булыуын аңлаған улар.

Телһеҙ кешегә халыҡ элек-электән бер зәғиферәк зат итеп ҡараған. Ундай кешеләр элек тә булған, хәҙер ҙә бар. Телһеҙ халыҡ буламы һуң? Юҡ, әлбиттә. Ә бына халҡыбыҙҙың ярым телле ҡәүемгә әйләнә барыуын милли зәғифлеккә тиңләп булмаймы ни? Телебеҙҙән яҙып, халҡыбыҙҙы зәғифләмәһәк ине, йәмәғәт. Бөйөк Рәмиебеҙ васыятына тоғро ҡалайыҡ: "Халҡым теле - миңә хаҡлыҡ теле, Унан башҡа минең илем юҡ; Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ, Иле юҡтың ғына теле юҡ!"

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

## *ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

### *Һеҙҙең йәш быуында телһөйәрлек тәрбиәләү һабаҡтары, алымдары, саралары ниндәйерәк, тәжрибәгеҙ менән уртаҡлашығыҙ әле...*

***Нурзиә ХӘСӘНОВА, Өфө ҡалаһында үткән "Йәш ғаилә-2020" конкурсында еңеүсе ғаиләлә ике бала әсәһе, "Йәншишмә" гәзите хеҙмәткәре:*** Бөгөн Өфөлә балаларына туған телде өйрәтеүсе, уларҙы милли мөхиткә ылыҡтырып үҫтереүсе байтаҡ башҡорт ғаиләләрен беләм һәм шуға һөйөнәм, күптәренән өлгө алырлыҡ. Тормош иптәшем менән ике бала үҫтерәбеҙ: Нурсолтан улыбыҙ - 3-сө, Сәлимә ҡыҙыбыҙ 1-се класта уҡыйҙар. Ҡала мөхите, гаджет, телевидение теле үҙенекен итә барыбер, тип уйлайым, сөнки балаларыбыҙ башҡортса акцентһыҙ һөйләшһәләр ҙә, телде беҙ теләгән кимәлдә белеп бөтмәйҙәр әле, шуға күрә был йәһәттән ҡалала йәшәүсе ата-әсәләргә балаларҙан күҙ яҙлыҡтырмай, уларҙың телмәрен байытыу, телһөйәр һәм илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү өсөн эшләргә лә эшләргә әле. Беҙҙең осраҡта шуныһы ла бар: Орджоникидзе районының беҙ йәшәгән тирәһендә башҡорт гимназияһы юҡ, шуға күрә балалар тәүҙә урыҫ телле балалар баҡсаһына йөрөнө, хәҙер ҡәҙимге гимназияла уҡыйҙар. Башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнәләр, телмәрҙәре һәйбәт тә, тик грамматиканан аҡһайҙар. Бергә белем алған тиҫтерҙәре телде хөртөрәк белгәс, талап көслө түгел. Балаларыбыҙ гимназияла ла, башҡа йәмәғәт урындарында ла кеше фекеренә ҡарамай, тартынмай-нитмәй гел үҙебеҙсә һөйләшәләр. Мәктәптәге концерттарҙа әүҙем ҡатнашалар һәм һәр ваҡыт башҡортса сығыш яһайҙар. Нурсолтан баянда башҡорт көйҙәрен уйнай, Сәлимәбеҙ милли кейемдә бейей.

"Туған телде өйрәтеү алымдарығыҙ ниндәй?" тигән һорауығыҙға килгәндә, улар күп инде ул, тик шулай ҙа иң тәүҙә өйҙә башҡортса аралашыу. Ике телде бутап һөйләмәҫкә тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Телде өйрәтеүҙең тағы бер һәйбәт, һөҙөмтәле алымы - башҡорт телендә шиғыр йә әкиәт һөйләү конкурстарында ҡатнаштырыу. Уға әҙерләнгән саҡта баланы сит кеше күҙлегенән ҡарайһың һәм телмәрендәге етешһеҙлектәрҙе тотоп алып, ваҡытында төҙәтеп бараһың. Әкиәт теле бай бит ул, бала унда үҙе өсөн яңы һүҙҙәрҙе таба, мәғәнәһен һорай һәм үҙләштерә. Тик халыҡ алдында сығыш яһарға уларҙы бәләкәйҙән өйрәтеү яҡшыраҡ. Ютуб-канал асҡыбыҙ килә, тине бер мәл балалар. Башҡортса алып барһағыҙ ғына асып бирәм, тигән шарт ҡуйҙым уларға. Башҡортса видеояҙмалар төшөрә башлағас, был алымдың замана балаларына телде өйрәтеү өсөн үтә отошло алым икәнен тойҙом. Киләсәктә башҡортса интернет-каналдар күбәйһен дә балаларыбыҙ бер-береһе менән башҡортса рәхәтләнеп аралашһын ине, тип хыялланам. Әйтеүемсә, ҡала шарттарында телде һаҡлап ҡалыу еңел түгел. Туған телебеҙ өсөн көн дә көрәшергә кәрәк. Балаларҙың телмәрендәге урыҫ һүҙҙәрен гел башҡортсаға әйләндереп торорға, шул уҡ ваҡытта үҙ телмәреңә лә иғтибарлы булырға кәрәк.

**Мәктәптә иһә башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытырыу өсөн дә холҡондоң ныҡ булыуы мөһим. Класта бер һин генә баланды башҡортса уҡытыр булһаң, үҙ һүҙеңдә ныҡ торорға, фекереңде ярып әйтә алырға ла кәрәк бит. Тап ошо сифат етмәгәнлектән, күп ата-әсәләр балаларына туған тел итеп урыҫ телен һайларға мәжбүр була. Ике тел менән баштарын бутарға теләмәйбеҙ, тип әйткән ата-әсәләр ҙә бар. Ә бит үҙ телеңде белеү, киреһенсә, аң кимәлен үҫтерә генә. Мәҫәлән, сентябрҙә информатика буйынса халыҡ-ара олимпиадала еңеү яулаған милләттәшебеҙ Ғимран Абдуллиндың әсәһе лә бер әңгәмәһендә туған телдең аң үҫешенә ыңғай йоғонтоһона айырым баҫым яһаны.**

Ғалимдар иҫбатлауынса, бер телдән икенсеһенә күскән саҡта мейелә һоро матдәнең күләме арта, тиҙәр. Ул матдә мәғлүмәтте анализлау өсөн яуап бирә, йәғни билингвизм тиҙ уйларға һәм ғәҙәти булмаған хәлдәрҙә юғалып ҡалмаҫҡа ярҙам итә. Тағы бер тикшереү һөҙөмтәһе: ике теллелек яңы шарттарға тиҙ яраҡлаша, кешеләр менән йәһәт кенә уртаҡ тел таба алыуға булышлыҡ итә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Геройы Александр Доставалов исемендәге батальондың рота командиры "Томан" Батырлыҡ ордены менән бүләкләнгән. "Томан" позывнойлы яугир "Ҡыйыулыҡ өсөн" миҙалына ла лайыҡ булғайны. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, рота командиры "Томан" Ишембай районы хакимиәтендә спорт идаралығы етәксеһе булып эшләгән.

✓Идара итеүсе команда "Башҡортостан 3.0" программаһы өҫтөндә эште ярты йыл эсендә тамамлаясаҡ. Радий Хәбиров "Тура бәйләнеш"тә алдағы 10-15 йылда Башҡортостан киләсәген нисек күҙаллауы тураһында һорауға яуап биргән ваҡытта ошо турала белдерҙе. "Башҡортостан 3.0" программаһында беҙ иҡтисадтың, социаль өлкәнең ниндәй буласағын күрһәтербеҙ. Әммә 10 йәки 15 йылдан республиканың ниндәй буласағын әйтә алмайым, сөнки донъя шул тиклем тиҙ үҙгәрә. Республика етәксеһе булараҡ бурысым - офоҡтарҙы билдәләү".

✓Башҡортостан фәнде һәм яңы технологияларҙы үҫтереү өлкәһендә әүҙем эшләй һәм бының өсөн федераль проекттарҙың мөмкинлектәрен файҙалана. "Ғилми-белем биреү үҙәгенең бизнесты, фәнде һәм технологияларҙы нисек берләштерәсәген аңламай инек әле. Ләкин унда алдынғы инженер мәктәптәре, мегагранттар, донъя кимәлендәге лабораториялар буласағын белә инек. Фән менән әүҙем шөғөлләнмәһәк, асыштарҙы тормошобоҙға индермәһәк, артта ҡаласаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров яһалма интеллект тураһында һорауға яуап биреп.

✓Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан хәрбиҙәрҙең (шәхси йорттарҙа йәшәгән) ғаиләләренә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә түләү буйынса компенсация мәсьәләһе ҡарала, Башҡортостандың Финанс министрлығы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә утын бүлеү өсөн бюджеттан күпме аҡса кәрәк буласағын иҫәпләй, тине республика етәксеһе. "Был сара ҙур һорау менән файҙаланыла, сөнки ауыл еренән ир-егеттәр күп. Ғаиләләр сертификаттар аша ошо утындарҙы алһын өсөн сертификат режимына күсербеҙ, моғайын", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✓Башҡортостан биатлонсыһы Эдуард Латипов 10 саҡрымлыҡ спринтта беренсе урынды алды. Ярыш Ханты-Мансиҙа биатлон буйынса Рәсәй кубогы трассаһында уҙҙы. Спортсы Ханты-Мансиҙа ныҡ һыуыҡ булыуын, бындай шарттарҙа уҙыштың еңел бирелмәүен билдәләне.

*✓ Һәйкәлде, һис шикһеҙ, һүтергә, ҡырҡырға тура киләсәк. Бөтә һәйкәлдәр кеүек, өлөшләп һүтелә һәм һуңынан иретеп йәбештерелә. Ул алып кителәсәк һәм реконструкция цехтарҙың береһендә үткәреләсәк.*



ҠЫҪҠАСА

# КӘРӘКЛЕ ЯРҘАМ

**Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары - махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың әсәләре һәм ҡатындары маскировкалау селтәрҙәре бәйләй һәм яугирҙарға ярҙам итеү буйынса башҡа бик күп бурыстарҙы үтәй.** Бишбүләк районында йәшәүсе ҡатын-ҡыҙҙар Радий Хәбировҡа "тура бәйләнеш"тә 800-ҙән ашыу селтәр, йәғни 16 мең квадрат метрҙан ашыу селтәр үреүҙәре хаҡында һөйләне. Әммә был ғына етмәй, тип билдәләне ҡатындар. "Беҙҙә маскировкалау селтәрҙәрен тағы ла күберәк үреү мөмкинлеге һәм теләге бар. Әммә материал ҡиммәт тора", - тип зарлана ҡатын-ҡыҙҙар. Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаевҡа материалдар мәсьәләһен хәл итергә ҡушты. Шулай уҡ республика етәксеһе Башҡортостандың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяевтан тегеү предприятиеларында материал ҡалдыҡтары ҡалһа, уларҙы маскировкалау селтәрҙәре эшләү нөктәләренә ебәреүҙе һораны.

✓**"Тура бәйләнеш" барышында Радий Хәбировтан республиканың Шишмә районында төҙөлөп ятҡан Евразия күсмә цивилизациялар музейы хаҡында ла һоранылар.** Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, буласаҡ музейҙың визит үҙәге киләһе йылдың май-июнь айҙарында асылырға тейеш. Шулай уҡ был ваҡытҡа Турахан кәшәнәһенә илткән ағас экоһуҡмаҡ та һалынасаҡ. "Был ғәйәт ҙур проект, 10 мең квадрат метрлыҡ майҙандағы музейҙы үҙ эсенә аласаҡ, беҙ унда төрлө симпозиумдар үткәрергә, фәнде үҫтерергә, һуңынан үҙенең тимерлеге, умартալығы, оҫтаханаһы булған Башҡорт аты үҙәген һәм Этноауыл асырға йыйынабыҙ. Шулай уҡ кәшәнә янындараҡ спа-отель төҙөргә тигән ниәтебеҙ бар", - тип һөйләне республика етәксеһе. Шул уҡ ваҡытта төҙөлөштө тамамлауҙың аныҡ ваҡытын әйтеүе ҡыйыныраҡ, тине ул.

✓**"Тура бәйләнеш" барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң 450 йыллығы уңайынан тантаналар ҡасанға планлаштырылыуы хаҡында һөйләне.** Ҡала көнө 12 июндә билдәләнһә лә, байрам сараларын август аҙағында үткәреү планлаштырыла. Радий Фәрит улы баш ҡаланың 450 йыллығы алдынан Өфөлә ағастарҙы ҡырҡыу тураһында һорауға ла яуап бирҙе. Киреһенсә, һәр ваҡыт яңы ағастар ултыртыла, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. "Ултыртылған ағастар теге йәки был сәбәптәр арҡаһында ҡырҡылғандарына ҡарағанда күберәк, - тине Радий Хәбиров. - Бер өлөшөн ҡырҡабыҙ, әммә улары урынына мотлаҡ яңыларын ултыртабыҙ. Беҙҙе баш ҡалабыҙҙың йәшелләндерелмәйһегеҙ тип ғәйепләргә кәрәкмәй, беҙ шуның менән генә шөғөлләнәбеҙ - матур ағастар ултыртҡыҡ. Беренсенән, улар яңы, сирләмәй һәм башҡалар. Ағастарыбыҙ әкренләп яңыртылырға тейеш. Беҙ ошо эште алып барабыҙ".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# САЛАУАТ ҺӘЙКӘЛЕ ТУРАҺЫНДА



**"Тура бәйләнеш"тә Радий Хәбировҡа Салауат Юлаев һәйкәлен ремонтлау буйынса һорау бирелгәйне.**

Республика Башлығы социаль селтәрҙә таралған "шау-шыу аҫтында һәйкәлде алып ташлайҙар" кеүек имеш-мимештәргә ҡарата фекерен белдерҙе. "Беренсенән, һәйкәл 50 йылдан ашыу тора һәм ул реконструкцияға мохтаж, - тине Радий Хәбиров. - Быларҙың барыһын да эксперттар һөйләй һәм визуаль күрергә мөмкин. Быны ҡабул итергә һәм мәғәнәһеҙ бәхәсләшеүҙе туҡтатырға кәрәк. Юғиһә, фажиғә буласаҡ, көслө елдәр булып тора. Икенсенән, республикала мин уны реконструкциялауҙы теләгән һуңғы кеше. Минә бөтә гонаһтарҙы, хаталарҙы һәм кисерештәрҙе үҙ өҫтөмә алырға тура киләсәк". Радий Хәбиров билдәләүенсә, һәйкәлде реконструкциялау юбилей сараларынан һуң башланасаҡ. Эш шунда, әле тикшереү, экспертиза процедуралары бара һәм 2024 йылдың икенсе яртыһына ремонт башларға мөмкинлек биргән бөтә документтар әҙер буласаҡ. "Был арзан булмаясаҡ - 300 миллион һум хаҡында һөйләйбеҙ, - тип билдәләне республика Башлығы. - Һәйкәлде, һис шикһеҙ, һүтергә, ҡырҡырға тура киләсәк. Бөтә һәйкәлдәр кеүек, өлөшләп һүтелә һәм һуңынан иретеп йәбештерелә. Ул алып кителәсәк һәм реконструкция цехтарҙың береһендә үткәреләсәк". Радий Хәбиров һәйкәлде урынында реконструкциялау мөмкинлеген әкиәт тип атаны. Был рәүешле 40 тонна ауырлыҡтағы һәйкәлде сифатлы итеп реконструкциялау мөмкин түгел, тип билдәләне республика Башлығы.

# ХАЛЫҠ БОРСОЛА ИНЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тура бәйләнеш барышында Өфө ҡаласығының яҙмышына асыҡлыҡ индерҙе.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың мәғлүмәт сәйәсәте буйынса эксперт советы етәксеһе Шамил Вәлиев шундай һорау бирҙе һәм был тема624ың ентекле тикшерелеүе тураһында һөйләне. "Республика етәкселегенең халыҡҡа хәүеф тыуҙырыу бурысы юҡ һәм өлегә православие сиркәүе төҙөлөшө туҡтатылған, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Мосолмандарҙың Әр-Рәхим мәсете төҙөлөшөн тамамламай тороп, ниңә тағы бер ҡорам төҙөйһегеҙ, тигән талабы ғәҙел булғандыр тип уйлайым. Был проект менән үҙем шөғөлләнәм тип әйткәйнем инде. Әле беҙ ундағы хәлде ныҡлап тикшерәбеҙ, сөнки ошо ваҡыт эсендә, 2005 йылдан алып, күп ваҡиғалар булған. Мәсьәлә етди, быйыл мәсеттең бер көмбәҙе емерелеп төшкәйне. Беҙ ҡарар ҡабул иттек, финанслау сығанаҡтары аңлашыла. Православие ғибәҙәтханаһына килгәндә, күптәр ҡаршы икән, ҡолаҡ һалырға кәрәк. Шуға күрә унда депозитарий буласаҡ".

# ЯҢЫ ТИМЕР ЮЛЫ...

**Өфөнөң "Торатау" конгресс-холлында Рәсәйҙең иҡтисади үҫеш министры Максим Решетников һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашлығында Рәсәй төбәктәренең иҡтисад министрҙары менән беренсе координация кәңәшмәһе булып үтте.**

Унда республиканың экспорт ҡеүәте тураһында ла һүҙ булды, хәҙер төбәктен Яҡын Көнсығыш һәм Азия илдәрендә яңы һатыу баҙарҙарын әүҙем үҙләштереүе хаҡында, 2022 йылда республиканың экспорт күләмен 150 миллион һумға арттырыуы, һуңғы ике йылда тышҡы сауҙа әйләнешенең 40 процентҡа артыуы билдәләнде. Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция эшмәкәрлеге министры Рөстәм Моратов "Сибай - Подольск - Новорудная" тимер юлын төҙөү буйынса төбәк инвестиция проекты менән таныштырҙы. Яңы тимер юлы Силәбе тимер юл узелын бушатасаҡ һәм Ҡаҙағстанға юлды 250 километрға ҡыҫҡартасаҡ, йылына 14 миллион тоннаға тиклем йөк ташыуҙы үҙ өҫтөнә аласаҡ. Йөк һәм пассажирҙар ағымын арттырыуҙан тыш, ул эшкәртеүсе предприятиеларҙы баҡыр-цинк рудаһы запастары булған үҙенсәлекле ятҡылыҡтар менән бәйләргә мөмкинлек бирәсәк. Проекттың яҡынса хаҡы - 72 миллиард һумдан ашыу, инвестицияларҙың дөйөм күләме - 116 миллиард һум. Проектлауға һәм төҙөүгә яҡынса 9 йыл ваҡыт китәсәк. Проектлау эштәре киләһе йылда башлана.

Максим Решетников Көнсығыш сығыу юлы төҙөлөшөнөң ниндәй этапҡа килеп етеүе менән ҡыҙыҡһынды. "Эштәр тамамланыуға табан бара, 2024 йылдың ғинуарында Көнсығыш сығыу юлында автомобилдәр хәрәкәтен асыу планлаштырыла", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Республика Башлығы Рәсәйҙең иҡтисади үҫеш министрына быйыл октябрҙә беҙҙә Белоруссия менән берлектәге "Амкодор - Ағиҙел" заводы эшләй башлауы хаҡында һөйләне.

# БАШҠОРТ АТЫ ПАРКЫ...

**"Ирәндек" тарихи-археологик һәм ландшафт музей-ҡурсаулығы биләмәһендә башҡорт аты паркы булдырыла. Был хаҡта III Мәжитов уҡыуҙары барышында тематик түңәрәк өҫтәлдә хәбәр ителде.**

"Глобаль күҙлектән ҡарағанда, башҡорт аты хайуан ғына түгел, ә халҡыбыҙ өсөн тормош фәлсәфәһе ул. Беҙ Икенсе донъя һуғышына тиклемге осорҙо өйрәндек, ул ваҡытта беҙҙә миллионлаған баш йылҡы булған. Һуңынан улар ҡырҡа кәмегән. Һуңғы өс йылда аттарҙың һаны артыуын күрәбеҙ", - тип билдәләне вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко үҙенең сығышында башҡорт тоҡомло аттарҙың генофондын һаҡлау темаһын күтәрҙе. Ғалим һүҙҙәренсә, элек "башҡорт атына илке-һалҡы ҡараш" булһа, хәҙер республика Хөкүмәтенең ошо көнүҙәк мәсьәләгә иғтибар итеүе ҡыуандыра. Ул Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты ҡарамағында башҡорт аты буйынса айырым лаборатория асырға тәҡдим итте. "Йылҡысылыҡтың төп үҫеш йүнәлеше - һөт һәм ит. Әммә беҙгә спорт, туристик йүнәлештәрҙе лә үҫтереүҙе дауам итергә кәрәк. Симпозиумдар һәм фестивалдәр ойошторорға. Быны менән республика Хөкүмәте һәм Ауыл хужалығы министрлығы шөғөлләнә. Шуға күрә киләһе йылда башҡорт атына арналған фестивалде күләмлерәк итеп үткәрергә ине. Ул ныҡлап уйланылған булырға тейеш, шуға бәйле эксперт фекерен дә ишетке килә", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы етәксеһе.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө хосписын асыу бик юғары баһа алды. Әммә унда мохтаждарҙың барыһына ла урындар етмәй. Республикала тағы ла ошондай объект булырмы-юҡмы - тура бәйләнеш барышында Башҡортостан Башлығына ошондай һорау бирҙеләр. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, хоспис бюджеттан тыш аҡсаға, Башнефть һәм Башҡорстан сода компанияһы булышлығында төҙөлгән. "Эйе, унда койка фонды бәләкәй (өлкәндәргә 40, ә балаларға 20 урын). Ә ихтыяж ҙур - тиҫтәләрсә мең кеше, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Койка фондын арттырырбыҙ тип уйлайым. Әйтеп үткәнемсә, ундағы балалар үҙәге ниндәйҙер функциялар башҡарасаҡ, унда паллиатив ярҙам түгел".

✓Ағымдағы йылдың 10 айында республика биләмәһендә наркотиктар менән бәйле 1557 енәйәт теркәлгән, 377 кеше енәйәт яуаплылығына тарттырылған, 40 килограммдан ашыу төрлө наркотик тартып алынған. Шулай уҡ был өлкәләге енәйәттәргә юл ҡуймау маҡсатында балиғ булмағандар менән 1270 лекция уҙғарылған. Хәүеф төркөмөндәге мәктәп уҡыусылары өсөн тренинг дәрестәр, вакансия һәйлау өсөн шәхси консультациялар уҙғарылған. Өфө ҡалаһы белем биреү идаралығы етәксеһе Азат Батыршин белдереүенсә, быйыл йәй 5585 бала эшкә урынлаштырылған, был уҙған йыл менән сағыштырғанда 455 балаға күберәк.

✓Өфөлә Ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата көс ҡулланыуға ҡаршы халыҡ-ара көрәш көнөнә арналған "Әсәй - тәүге һүҙебеҙ!" темаһына "кызыу бәйләнеш" үткәрелде. "Ғаилә" республика ресурс үҙәгенең бүлек мөдире Елена Ғабдрахманова һәм "Индиго" үҙәге психологы Альбина Фәнил ҡыҙы Солтанова халыҡҡа ғаиләлә йәберләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм балаларҙы хоҡуҡи яҡлау, социаль яҡлау хеҙмәттәренең эшмәкәрлеге, ғаиләлә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү ысулдары һәм түкмалып йәшәгән гүзәл заттарға психологик ярҙам тураһында мәғлүмәт бирҙе.

✓Өфөлә Флот тыҡрығы һәм Дим йылғаһы аша күпер араһындағы участкала Дим шоссеһын ремонтлау планлаштырыла. Эштәр 2024 йылдың 20 майында башланып, 30 авгусында тамамланырға тейеш. Подрядсы асфальт ҡатламын алып ташларға, суйын люктарҙы һүтергә, яңыларын ҡуйырға, асфальт-бетон ҡатнашмаһын түшәргә, махсус билдәләр һыҙырға тейеш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!*



# КӨРӘМӘҺӘЛӘР...

**Быйыл да муниципалитеттың рәсми сайтында "Ҡарлы Өфө" интерактив картаһы эшләйәсәк. Ҡайҙа ҡар көрәлмәгән, тротуарҙар боҙҙан таҙартылмаған - был хаҡта һәр кем ошо сервис аша хәбәр ебәрә ала. 2021 йылда эшләй башлаған сервис халыҡ араһында бик популяр.**

Хәбәрегеҙҙә мотлаҡ был урындың координаталары, фотоһы булырға тейеш. Кадрға эргә-тирәләге биналар, башҡа стационар ориентирҙар эләкһен, сөнки махсус хеҙмәт аҙаҡтан ҡарҙан таҙартылған урынды үҙе фотоға төшөрөп һалырға бурыслы, унда ла шул уҡ ракурс һаҡланасаҡ. Ҡар өйөмөнөң ҡайҙа урынлашыуы аныҡ билдәләнмәһә, мөрәжәғәтегеҙ кире ҡағыласаҡ. Шулай уҡ Өфөгә ҡағылмаған территорияларҙы ебәрмәүегеҙ һорала. Текста норматив булмаған лексика ҡулланыу йәки хәбәрҙең аңлайышһыҙ итеп яҙылыуы ла ғаризаның ҡабул ителмәү сәбәбе булып тора ала.

# МИНЕҢ ӨФӨМ ШУНДАЙ

**Баш ҡала хаҡындағы иҫтәлектәр "Уфа. Это моя земля" тигән йыйынтыҡҡа инде, тип хәбәр итә Өфө хакимиәтең матбуғат хеҙмәте. Уларҙың нигеҙендә "Юғары иҡтисад мәктәбе" Милли тикшеренеү университетының дизайн мәктәбен тамамлаусылар Ева Безменова менән Софья Вавраның сторителлингтары ята.**

Сторителлинг - ул тарихтар һөйләү тигәнде аңлата. Был йыйынтыҡ баш ҡаланың 450 йыллығы алдынан үткәрелгән "Был минең Өфөм" әҙәби конкурсында еңеүселәрҙең һөйләгән тарихтарынан төҙөлгән дә инде. "Бындай хәл бары тик бында ғына була ала" тигән девиз аҫтында яҙылған 23 иҫтәлек-тарих "Был минең ерем" кибер-белешмәһенең дауамы булып тора. Проектты фильмдар, мобиль ҡушымталар, видеоуйындар, башҡа цифрлы форматтарҙа артабан үҫтереү планлаштырыла һәм мәҙәни инициативалар Президент фонды сараларына тормошҡа ашырыла.

Өфөнө ишетеп кенә түгел, күреп белгән, яратҡан һәр Өфө кешеһе өсөн был йыйынтыҡ ҙур бүләк. Уның электрон форматын бушлай һәр кем үҙенә күсереп алыу мөмкинлегенә эйә.

# ЯҢЫ МӨМКИНЛЕКТӘР

**Башҡортостандың төп федераль инспекторы Алексей Касьянов Волга буйы федераль округында Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров ҡушыуы буйынса Өфөнөң балалар баҡсалары эшмәкәрлеген тикшерҙе.**

Ул Киров районының 324-се балалар баҡсаһын ҡараны. Балалар баҡсаһы тирәләй торлаҡ йорттар әүҙем төҙөлә, һөҙөмтәлә, йылдар буйына сиратта тороусылар ҙа була. Мәктәпкәсә белем биреү төбәк системаһын модернизациялау дәүләт программаһына ярашлы, бөгөн бында өҫтәмә рәүештә 60 урын барлыҡҡа килгән. Республика власы 5-се лицейҙың бер бинаһын балалар баҡсаһына бирә. Федераль һәм төбәк бюджеты иҫәбенә мәктәп кластары бәләкәстәр өсөн уңайлы төркөмдәргә әйләндерелә, ашхана йыһазландырыла, инженер коммуникациялары алыштырыла, косметик ремонт яһала.

Алексей Касьянов 144-се балалар баҡсаһында ла булды. Капиталь ремонттан һуң уның майҙаны ҙурайған. Төҙөүселәр бинаның ҡыйығын, йылытыу, вентиляция системаһын йүнәткән, яңы йыһаздар, уйынсыҡтар алынған, ихаталағы майҙансыҡтар төҙөкләндерелгән. Бында хатта бассейн да барлыҡҡа килгән, хәҙер аҙнаһына ике тапҡыр инструктор балаларҙы йөҙөргә өйрәтә. Йылы аш ашханала уҡ әҙерләнә. "Төбәктә ил Президенты башланғыс биргән милли проекттар, федераль программалар нисек тормошҡа ашырылыуын тикшереү дауам итә. Бүленгән миллиард һумдарҙың ҡайҙа йүнәлтелеүен беҙ күреп торорға тейеш", - тине Алексей Касьянов.

# АҒАСТАР ҘА КЕШЕ КЕҮЕК

**Өфөнөң Карл Маркс, Туҡай, Зәйнулла Рәсүлев, Таш күпер, Октябрь революцияһы, Коммунистик, Ленин, Пушкин, Мостай Кәрим, Совет урамдарында, шулай уҡ алты йәмәғәт территорияһында - Софья, Пушкин аллеяларында, Маяковкий, Ленин, "Театр" скверҙарында, "АртТерия" скульптуралар скверында ағастарҙың ботаҡтары ҡырҡыласаҡ.**

Ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ағастарҙың ботаҡтарын ҡырҡып тороу - уларҙы тәрбиәләүҙең мөһим өлөшө. Ул ҡороған ботаҡтарҙан ҡотолорға, ағастың үҫеү йүнәлешен контролдә тоторға, хатта ағасты йәшәртергә мөмкинлек бирә. Баш ҡалала сереп ҡолау хәленә еткән ҙур ағастарҙы йәш үҫентеләргә алыштырыу ҙа әүҙем башҡарыла. Йыл һайын 6 меңдән ашыу йүкә, алмағас, мышар, ҡайын, шыршы, ҡарағай ултыртыла. Ҡала урмандары ла тергеҙелә, йыл һайын улар 20 меңдән ашыу яңы үҫенте менән тулылана. "Әле ботаҡтары ҡырҡылған ағастар йәмһеҙләнеп ҡалған кеүек булыр, әммә яҙын сәскә атҡас, улар беҙҙе матурлығы менән ҡыуандырасаҡ", - тинеләр ҡала хакимиәтенән. Өфө биология институтының урмансылыҡ белеме лабораторияһы мөдире, биология фәндәре докторы Алексей Кулагин фекеренсә, башҡа миллионлы ҡалаларҙан айырмалы рәүештә, Өфөнө йәшелләндереү буйынса эш яҡшы алып барыла. "Ағастар ҙа кешеләр кеүек, ҡартая. Ваҡыты-ваҡыты менән ҡарт ағастарҙы йәшенә алыштырыу ғәҙәти хәл", - ти ул.

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**14 декабрҙә һөйөклө туған телебеҙ - Башҡорт теле көнөн билдәләү айҡанлы "Киске Өфө" гәзите өр-яңы проект иғлан итә. Беҙ уны "Улар башҡорт мәктәбендә уҡыны!" тип атаныҡ. Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## МОРТАЗА ҒӨБӘЙҘУЛЛА УЛЫ РӘХИМОВ



Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты. Күгәрсен районының Тәүәкән ауылында тыуған. Йомағужа башланғыс мәктәбендә, 1952 йылдан Теләүембәт ете йыллыҡ мәктәбендә уҡый. Өфө нефть техникумын һәм Өфө нефть институтын тамамлай. 1956 йылдан 1990 йылға тиклем Өфө нефть эшкәртеү заводының ҡоролма операторынан КПСС-тың XXII съезы исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводы директоры вазифаһына тиклемге хеҙмәт юлын үтә. 1990 - 1993 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Рәйесе. 1993 - 2010 йылдарҙа - Башҡортостан Республикаһы Президенты. Ил алдындағы хеҙмәттәре өсөн бирелгән наградалары:

"Почёт Билдәһе" ордены (1980); Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1986); Халыҡтар Дуҫлығы ордены (1994); II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены (1999); "Башҡортостан Республикаһы алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены (2000); Рәсәй Тәбиғәт фәндәре академияһының В. Н. Татищев исемендәге "Ватанға файҙаһы өсөн" ордены (2002); Бөйөк Пётр ("Дәүерҙең иң яҡшы менеджерҙары" йәмәғәт фонды) ордены (2002); Салауат Юлаев ордены (2004); I дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены (2010).

**(Дауамы бар).**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Киҙеү

❖ 1-әр өлөш йүкә сәскәһе һәм баланды ҡушырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Төнәтмәнең 200 грамын эсе көйөнсә төнгөлөккә эсергә.

❖ 1-әр өлөш йүкә сәскәһе һәм мәрүәрҙе (бузина) ҡушырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Һалҡын тейҙереп ауырығанда эҫе көйөнсә бөтөргәнсе эсергә.

## Диабет

❖ 5 грамм киптерелгән болон туҡранбашына (клевер луговой) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Һәр 3-4 аҙна дауаланған һайын 5-10 көнгә туҡталып торорға кәрәк.

❖ 1 стакан һыуға 15 мл дегәнәк (лопух) тамыры һәм япраҡтары һутын ҡушып, 3-кә бүлеп, 1 көндә эсеп бөтөргә. Һәр 3-4 аҙна дауаланған һайын 5-10 көнгә туҡталып торорға кәрәк.

## Теш һыҙлаһа

❖ 1 стакан һыуға 1 йомортҡа ағы, 1 балғалаҡ аш тоҙо, 3 ампула 10 процентлы новокаин ҡушырға. Теш түҙгеһеҙ һыҙлағанда ауыҙҙы 5-10 минут сайҡатырға.

## Аяҡ тырнағында бәшмәк

❖ 100 грам һөтлөгәнгә (молочай) 3 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябырға һәм 30 минут төнәтеп һөҙөргә. Аяҡтарҙы ошо төнәтмәгә 20 минут тығып ултырырға. Был рәүешле тулыһынса һауыҡҡанға тиклем көн һайын дауаланырға.

## Псориаз

❖ Был ауырыуҙы дауалағанда мәрүәрҙе (бузина) ҡулланырға була. Мәрүәр ботаҡтарын (ҡыш һәм йәйгеһен), йәки сәскә һәм япраҡтарын (йәйгеһен) ваҡлап, өҫтөнә сыҡҡансығына һыу ҡойоп, 20-30 минут ҡайнатырға. Шунан псориаз менән зарарланған тән өлөштәрен етерлек эҫелектәге ошо һыуға тығып, 20 минут ултырырға. Был рәүешле көнөнә 2 тапҡыр дауаланырға. Ботаҡ һәм япраҡтарҙы һөҙөп алып, ҡайнатманы киренән йылытып, тағы бер нисә тапҡыр ҡулланырға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡортостан киләсәккә, юғары технологияларға төбәлгән республика икәнен күрһәтергә тырыштыҡ. Яңы йыл каникулдарында балаларығыҙҙы алығыҙ ҙа, ВДНХ-ға килегеҙ.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һуна өйрәк**
**(Кряква)**



Йылға өйрәктәре араһында иң эреһе. Яҙын ул ҡара-йәшел башы, муйынындағы аҡ муйынсаһы менән айырылып тора. Ҡойроғо аҫтынан ҡауырыйҙар өҫкә ҡарап тора. Йыраҡтан башы, түше ҡара, арҡаһы һәм муйыны аҡ булып күренә. Оскан сағында ҡанаттарының аҫты аҡ икәне күҙгә ташлана. Йәйен инә, ата, йәш ҡоштар барыһы ла һорғолт-ерән төҫтә. Бары тик ап-аҡ ҡашы һәм күҙҙәре аша үткән ҡара һыҙат айырылып тора. Барлыҡ миҙгелдә лә ҡанатында күкһел-шәмәхә төҫөндәге "көҙгө" була, ул ҡара һәм аҡ һыҙаттар менән биҙәлгән. Тәпәйҙәре ҡыҙғылт-һары йәки һары. Йорт өйрәгә кеүек быжылдай. Ата һуна өйрәк "шааҡ", "шваааҡ" тигән тауыш сығара.

Хәҙерге ваҡытта өйрәктәрҙең башҡа төрҙәре кәмей барһа ла, һуна өйрәк Көньяҡ Уралда иң киң таралған һәм күп һанлы булып иҫәпләнә. Марттың аҙағында уҡ осоп килә һәм апрелдән тәүге ун көнөндә ҡайтып бөтәләр. Күләүектәр йәйелеп ятҡан яландарҙа 30-60 өйрәк туп булып йөрөй. Төрлө һыу сығанаҡтарында оя ҡора. Йылға буйҙарында ағас төптәрендә, ужым баҫыуҙарында, күп йыллыҡ үләндәр үҫкән яландарҙа оя яһай. Ҡайһы саҡта ҡарға, һайыҫҡандарҙың ярайһы уҡ бейектә урынлашҡан (4 метрға тиклем) ташландыҡ ояларына йомортҡа һала. 8-11 йомортҡа һала. Әгәр ҙә улар ниндәйҙер сәбәптән һәләк булһа, ҡабаттан 4-6 йомортҡа һалып, уларҙы баҫып сығара. Был юғалтыу байтаҡ ҡына, йыл һайын 30, 40 процент йомортҡа шул рәүешле юҡҡа сыға. Бындай хәлгә ҡалған инә өйрәктәрҙең 60 проценты ҡабаттан баҫырға ултыра. Шулай уҡ яңы ғына сыҡҡан бәпкәләрҙең дә күбеһе һәләк була, һәр ғаилә уртаса 12 бәпкәнән 5-2-һен генә ҡанатландырып осороп ебәрә.

Башлыса үҫемлек менән туҡлана. Һыуҙа йөҙгән умыртҡаһыҙҙар төркөмөнә ҡараған бөжәктәрҙе, энәғараҡтың ҡарышлауыҡтарын ашай.

Июлдең 2-3-сө ун көнлөгөндә йәш ҡоштар оса башлай, берләшеп, һай күлдәргә ем артынан баралар. Август-сентябрь башында ошондай ваҡ һыу яткылыҡтарында туплапып, йылы яҡҡа осорға әҙерләнәләр.

Һуна өйрәктең тәбиғи дошманы булып эре аҡсарлаҡтар, ҡарға, йыртҡыс ҡоштар, берәҙәк эттәр тора, тап улар йомортҡаларҙы ашай ҙа инде. Бигерәк тә ҡарғалар уларҙың үрсеүенә кире йоғонто яһай.

Һуна өйрәк - кеше һунар иткән иң билдәле ҡош.

Башҡортостандың һуна өйрәктәре Каспий диңгеҙенең көньяҡ ярҙарында һәм көньяҡтараҡ Иранда, Ираҡта, Төркиәлә, Сүриәлә ҡышлай. 29, 41 йәшкә тиклем йәшәй. Һуна өйрәк - йорт өйрәктәре нәҫеленең башында тора.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# БАШҠОРТОСТАН - МӘСКӘҮҘӘ!

**Мәскәүҙә 4 ноябрҙә "Рәсәй" халыҡ-ара күргәҙмә-форумы асылғайны. Ул 161 көн - 2024 йылдың 12 апреленә - Халыҡтар берҙәмлеге көнөнән Космонавтика көнөнә тиклем дауам итәсәк. Үткән ялдарҙа күргәҙмәлә Башҡортостан көнө үтте. Республика менән танышырға теләүселәргә бай мәҙәни һәм күңел асыу программаһы тәҡдим ителде. "Рәсәй" күргәҙмәһендә төбәктең сәнәғәт, инвестиция, мәҙәни, туристик мөмкинлектәрен күрһәтәбеҙ. Бында халыҡ байрамдары үтә - барыһы ла бик сағыу һәм матур", - тине Радий Хәбиров сара тураһында.**






Башҡортостандың урам ихатаһында көнө буйы "Терра Башкортостан" һәм "Терра Ҡыш" фестивале барҙы. Башҡорт балы, шифалы үләндәр продукцияһы, республика оҫталары яһаған әйберҙәрҙән күргәҙмәләр эшләне. Шулай уҡ самаурҙар күргәҙмәһе лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Республика Башлығы Радий Хәбиров 100 Ҡарһылыу парадына старт бирҙе. Башҡорт Ҡыш бабайының йортон күрергә теләүселәр ҙә күп булды. "Ҡышҡы һабантуй" тип аталған программала иһә олоһо ла, кесеһе лә әүҙем ҡатнашты, бар ҡунаҡтарға ла башҡорт сәйе тәҡдим ителде. Радий Хәбиров Беларусь Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы гәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы илсеһе Дмитрий Крутой менән башҡорт туйы йолаһын да ҡараны.

Космонавт булып кейенгән башҡорт артистары легендар "Чайка" автомобилендә Мәскәүҙең билдәле урындарында булып, халыҡ менән аралашты һәм уларҙы Башҡортостан көндәрендә ҡатнашырға саҡырҙы. Республика үҙенең экспозицияһын футурик стендта космик аппарат формаһында ҡорғайны. Унда республиканың төрлө өлкәләрҙәге төп ҡаҙаныштары сағылыш тапты. Стендтың дөйөм майҙаны - 124 квадрат метр. Ул был сарала юғары технологиялар ҡулланып эшләнгән һәм тулыһынса 3D-принтерҙа баҫылған берҙән-бер стенд. Майҙансыҡтың ҡунаҡтарына медицина, мәғариф, ауыл хужалығы, мәғлүмәт технологиялары өлкәләре буйынса виртуаль сәйәхәт тәҡдим ителде.

Башҡортостан көнөн ҙур мәҙәни программа тамамланы. Уның бер өлөшөн "Ел тыуҙырған көй" этник музыка һәм милли фольклор концерты тәшкил итте. Ә ВДНХ-ның бер павильонында "Арғымаҡ" төркөмө, "Бишбармаҡ" оркестры, Zainetdin, Ринат Мөхәмәтйәнов еткселегендәге милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Аҫҡар Абдразаҡов сығыш яһаны. Аҫҡар Абдразаҡов оркестрға ҡушылып "Урал" һәм "Ирәндек" халыҡ йырҙарын, Башҡорт опера һәм балет театры солистары Рәсил Сәғитов менән Гөлсинә Мәүликәсова Заһир Исмәғилевтың "Торналар йыры" балетынан адажио, БР халыҡ артисы Әлфиә Кәримова "Һандуғас" һәм "Элмәлек" йырҙарын башҡарҙы. Ҡурайсылар ансамбленең "Төньяҡ амурҙары" композицияһы ла бик йылы ҡабул ителде.

"Бында Рәсәйҙең бөтөн төбәге лә күрһәтелгән. Башҡортостан киләсәккә, юғары технологияларға төбәлгән республика икәнен күрһәтергә тырыштыҡ. Яңы йыл каникулдарында балаларығыҙҙы алығыҙ ҙа, ВДНХ-ға килегеҙ. Оло кешегә лә, балаға ла бында күрер, тотоп ҡарар, уйнар өсөн нәмә күп. "Башҡортостан оҙон ғүмерлелек" программаһы буйынса 2000 ветеранды бында ебәрергә килештек тә инде. "Мәктәп туризмы" программаһы буйынса 50 уҡыусы күргәҙмәне ҡараны ла; бындай уҡыусыларҙың һаны 2500 буласаҡ, каникулдарҙа, шулай уҡ күргәҙмә ябылғанға тиклем уларға тап ошо сәйәхәтте тәҡдим итәсәкбеҙ. Килегеҙ, күрегеҙ, эстетик ҡәнәғәтләнеү алығыҙ, илебеҙҙең ни тиклем бай һәм төрлө булыуын күрегеҙ", - тине Радий Хәбиров.

*ИҢ МАТУР ҺҮҘ*

# АҒИҘЕЛ

**Йырҙарҙа йырланған, киң танылған Ағиҙел йылғаһы атамаһы бөтәһенә лә таныш. Ул - Башҡортостандағы иң ҙур һәм иң матур атамалы йылға. Тап уның аша күптәр беҙҙең республиканы таный.**

Ағиҙел - башҡорт телендәге иң матур һүҙ ул. Аҡ иҙел, йәғни аҡ, саф, яҡшы, йәмле, матур йылға. Башҡорт халыҡ ижадында һәм йәнле һөйләштә йылға иҙел тип йөрөтөлә. "Урал батыр" ҡобайырында "Көмөштәй бер аҡ йылға", "Иҙел батыр таҡҡан, ай, Аҡ йылғаһы" тигән юлдар бар. Ғөмүмән, беҙҙең башҡорт телендә "аҡ" күп осраҡта иң яҡшы, иң матур, иң сифатлы тигәнде аңлата.

Был матур һыу яткылығы тураһында халыҡ күпме йыр сығарған, шағирҙар шиғыр яҙған, рәссамдар һүрәт төшөргән. Күпме ғашиҡ уның янында йөндоҙ һанаған. Күпме әҫәрҙә уның исеме телгә алынған.

"Ағиҙел" күптән инде Ватан, Башҡортостан, Урал һүҙе кеүек беҙҙең республикала тыуып үҫкән әҙиптәрҙең, нәфис һүҙ оҫталарының, айырыуса башҡортса ижад иткәндәрҙең шиғри символына әйләнгән.

Ни өсөн тиһегеҙме?

Беренсенән, матур яңғыраған һүҙ булғанға. Икенсенән, мәғәнәһе йәмле булғанға. Шуның өсөн дә беҙҙең Ағиҙел менән бәйле бик күп атамалар бар. Был исемде бик күп объекттар, урамдар йөрөтә. Мәҫәлән, Мәләүеҙҙә, Өфөлә "Ағиҙел" ҡунаҡханаһы бар. "Ағиҙел" ҡырынғысын иҫләгән кеҫлә заттар ҙа юҡ түгелдер. Башҡортостан Республикаһының төньяҡ-көнбайышындағы ҡаланың исеме лә Ағиҙел. Башҡорт телендә ижтимағи-сәйәси журнал сыға. Ошо матур исемде биҙәү-ҡулланма әйберҙәре етештереүсе дәүләт унитар предприятиеһы ла йөрөтә.

Күптән түгел "Азимут" авиакомпанияһы үҙенең парҡындағы бер "Сухой Суперджет" пассажир лайнерына беҙҙең йылға атамаһын биргән. RA-89191 борты "Белая" тип йөрөтөләсәк. Бик тә һөйөнөслө, әлбиттә, был яңылыҡ. Әммә карталарҙа Белая Ағиҙел тип тәҙәтелеп яҙылһа, лайнер Ағиҙел тип аталһа, икеләтә ҡыуаныслы булыр ине. Ни тиһән дә, республиканың төп халҡы телендә быуаттар буйы был йылға Ағиҙел тип атала. Бында, әлбиттә, авиакомпанияның бер гәйебе лә юҡ.

Беҙгә, үҙебеҙгә, республикабыҙҙың тарихи һәм иҫтәлекле урындарының, ауылдарҙың, йылғаларҙың, тауҙарҙың, күлдәрҙең традицион исемдәренә һаҡсыл булырға кәрәк.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

12

# Туған телем!

9-15 декабрь (аҡъюлай) 2023 йыл

№48 (1090)

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

## КИТАБЫҢДЫ КЕМ УҠЫР?



**"Киләсәктә башҡортса китаптарҙы уҡырлыҡ кеше булырмы?" тигән һорауҙы йыш бирәләр. Ҡапыл ғына яуап биреп булмай торған ҡәтғи һорау. Бәлки, уны икенсерәк итеп үҙгәртергә кәрәктер. Әйтәйек, "Киләсәктә башҡорт уҡыусыһына ниндәй китаптар, ниндәй әҫәрҙәр кәрәк буласаҡ?" Бына был саҡта инде иртәгәне, киләсәкте үҙгәртерлек мөмкинлектәр төҫмөрләнә башлай. Мөмкинлектәр булған урында өмөт тә бөрөләнә. Беҙ күп осраҡта "була" йә "булмай" тип кенә фекерләргә өйрәнгәнбеҙ. Ә бит мөмкинлектәр тап урталыҡта булыусан. Барыһы ла үҫеп килгән быуындарға, бигерәк тә кескәй балаларға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә туған телебеҙҙе өйрәтеү проблемаһына барып ялғана. Мәсьәләгә өс юҫыҡта ҡарайыҡ.**

**А Мөхәббәт ғәйепләме?** Элегерәк ауыл клубтарында кино афишаларына "16 йәшкә тиклемге балалар индерелмәй" тип яҙалар ине. Беҙ бала саҡта ундай сеанстарҙы күп осраҡта клуб тәҙрәләре аша күҙәттек. Ҡыш көндәрендә туңһаҡ-тундыҡ, әммә тәҙрәләрҙе тыныбыҙ менән иретә-иретә фильмдарҙы аҙағына тиклем ҡараныҡ. Йәш сикләүе хәҙерге ваҡытта ла телевизор аша барған фильмдарға ҡуйыла, тик ҡайһы ата-әсә был йәһәттән балаһын контролдә тота икән? Булһа ла, бик һирәктер. Күп кенә ата-әсәләр, олатай-өләсәйҙәр, ҡартатай-ҡартәсәйҙәр балаһының мыжыуынан ҡотолор өсөн тыйылғандарҙы рөхсәт итә.

Былар менән нимә әйтергә теләйем һуң? Сабыйҙарыбыҙҙы туған телебеҙҙән, рухиәтебеҙҙән айырған интернетҡа ла, смартфон-"һыйпафон"дарға ла "Кр.дет. до 16 лет" тигән ҡәтғи сикләмә индермәйенсә тороп, йылдан-йыл халҡыбыҙ үҙенең тере балаларын юғалтыуын дауам итәсәк. Күҙебеҙ менән ҡашыбыҙ араһында милләтебеҙҙең киләсәгенән яҙабыҙ, йәмәғәт!

Һәр кемгә үҙ балаһы ғәзиз, һәр ҡайһыбыҙ үҙ балаһын ярата, бигерәк тә ейән-ейәнсәрҙәрен "Баланың балаһы балдан татлы" тип иркәләй, үҙе лә иркәләнә. Тик ниңә үҙ балаларыбыҙҙы, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙе сикһеҙ яратыуыбыҙ, мөхәббәт тойғобоҙ милләтебеҙгә зыян килтерергә тейеш һуң? Хоҙай бит был тойғоно кешенең күңелендә шуның өсөн барлыҡҡа килтермәгән. Хәйер, мөхәббәт ғәйепләме бында?

**Б Ғаиләме? Мәктәпме?** Йыш ҡына балаларҙың туған телдәрен белмәүенең сәбәбен мәктәп ғаиләнән, ғаилә мәктәптән эҙләй. Уларҙың бәхәсенә халыҡ мәҡәле нөктә ҡуя: "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр". Тағы ла төпкәрәк төшөп уйланһаҡ, баланың 5 йәшенә тиклем туплаған мәғлүмәте 5 йәшенән 25 йәшенә тиклем туплаған мәғлүмәтенә тиң. Тимәк, әгәр ҙә бала ғаиләһендә туған телен белмәйенсә мәктәпкә бара икән, "поезд, тю-тю, киткән була".

Икенсе мәсьәлә: әгәр ҙә ғаиләлә баланың туған телен өйрәнерлек шарттар, мөхит юҡ икән, мәктәп, класс шул уҡ икенсе ғаиләгә әүерелә ала. Туған телдә аралашыу мөхите, туған телеңдә аралашыу ихтыяжы булмаһа, бер ниндәй уҡыу программаһы ла баланы үҙ телендә һөйләштерә алмаясаҡ. Мөхит, тағы ла бер тапҡыр - мөхит!

**В Әҙәбиәт нимәгә һәләтле?** Башҡорт яҙыусыһы бөгөн, ғөмүмән, уҙған быуатта ла шулай булды, ике-өс төрлө йөктө күтәреп барырға мәжбүр. Тәүгеһе - профессиональ ижад өсөн шарттарҙың булмауы арҡаһында яҙыусы төп ижад эшенән тыш, тағы ла ҡайҙалыр эшләргә тейеш, икенсеһе - эшенән, ғаиләһенән урланған ваҡыт иҫәбенә ижад итеү, өсөнсөһө - үҙенең уҡыусыһы, туған теле тураһында ла хәстәрлек күреп йәшәү. Был бик хуп, әлбиттә, әммә тап ошо өсөнсө шарт барыбер ҙә художестволылыҡты сикләүгә, бер төрлөлөккә, дидактикаға алып килә. Башҡорт яҙыусыһы элек тә, хәҙер ҙә мәғрифәтсе булды һәм булып ҡаласаҡ. Ә инде ошондай рухтағы әҫәрҙе донъя телдәренә тәржемә итһәң, ул донъяуи яңғыраш ала алмай барыбер ҙә.

Дөрөҫ, һүҙ ҙә юҡ, беҙ иң тәүҙә балаларыбыҙ өсөн мауыҡтырғыс, зауыҡлы һәм фәһемле әҫәрҙәр яҙырға бурыслыбыҙ. Ошо урында "Әҙәбиәт нимәгә һәләтле?" тигән һорауға яуабы ла табыла: "Әҙәбиәт мауыҡтырғыс, зауыҡлы һәм фәһемле әҫәрҙәр менән баланы үҙ туған телендә тәрбиәләргә һәләтле". Балалар өсөн "Айыу, бүре, төлкөләр, ҙур ҡолаҡлы өкөләр" тигән һымағыраҡ әҫәрҙәр генә яҙған яҙыусы теге быуатта тороп ҡалған. Балалар ундай әҫәрҙәрҙе уҡымай, көсләп уҡытһаң, туған телгә, әҙәбиәткә ытырғанып ҡарай башлай.

Ярар, балаларҙың ҡулынан смартфондарын тартып та алып булманы ти. Ә бит рухи мәҙәниәтте, туған телде шул уҡ "һыйпафон" эсенә индереп була бит. Нимә тиҙәр әле: "Әгәр ҙә тау Мөхәммәткә килмәһә, Мөхәммәт тауға бара".

Фәҡәт балалар әҙәбиәтенә генә иғтибарҙы йүнәлтеп, ғөмүмән, әҙәбиәтте ситтә ҡалдырыу ҙа дөрөҫ булмаҫ. Нимә генә тимә, балаларҙы милли рухта, туған телендә тәрбиәләүсе ата-әсәләрҙең үҙҙәрен дә был йүнәлештә тәрбиәләй алырлыҡ әҙәбиәт кәрәк!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

## ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫН...

### башҡа телгә күсермәйек!



**Башҡортостан тәбиғәтенең иҫ киткес матурлығы барыһын да хайран итә. Ҡуйы урмандар, икһеҙ-сикһеҙ дала, бейек ҡаялар, зәңгәр күлдәр, мәмерйә һәм башҡа тәбиғәт мөғжизәләре йәлләмәйенсә бүләк ителгән беҙгә.**

Тәбиғәттәге ер-һыу атамалары, ауыл, ҡала исемдәре - урындағы халыҡтың тарихи һәм мәҙәни мираҫы, тел ҡомартҡыһы улар. Географик атамаларҙың күпселек өлөшө теге йәки был ерҙең тәбиғи үҙенсәлегенә бәйләнгән. Күпселек топонимдарҙа ниндәйҙер шәхестең эшмәкәрлеге, уның тәбиғәткә булған йоғонтоһо, халыҡтарҙың йәшәү тарихы, ошо ерҙәрҙә барған тарихи ваҡиғаларға бәйле мәғлүмәт сағылған. Ҡыҫҡаһы, бер атама ла осраҡлы рәүештә йыйылған өндәр йыйылмаһынан тормай, ә һәр ҡайһынының мәғәнәүи контексы бар. Шуға күрә тарихи атамаларҙың юҡҡа сығыуына, икенсегә үҙгәртелеүенә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөнгө көндә топономика өлкәһендә күҙәтелгән иң ҙур проблемаларҙың береһе Башҡортостанды ла ситләтеп үтмәй.

Тағы ла шуны билдәләп үтергә кәрәк. Халыҡ үҙе йәшәгән төбәктә урынлашҡан бәләкәй генә тәбиғәт объекттарына ла исемдәр бирә. Мәҫәлән, һәр ауыл янындағы сауҡалыҡ, йылға боролмаһы, ҡалҡыулыҡ, быуа һәм башҡаларҙың үҙ атамалары бар. Ундай атамалар, ғәҙәттә, географик белешмәләрҙә һәм яҙма документтарҙа сағылыш тапмайынса, халыҡ телендә генә йәшәй.

Республика юлдары буйлап ҡуйылған күрһәткестәрҙә, радио тулҡындарында, телевизор экрандарында һәм гәзит биттәрендә ер-һыу атамаларының, ауыл һәм ҡала исемдәренең тупаҫ боҙолоуына, үҙгәртелеүенә, бөтөнләй икенсе мәғәнәле итеп тәржемә ителеүенә шаһитбыҙ. Әгәр ҙә оло быуын уларҙың ысынбарлыҡтағы исемдәрен яҡшы хәтерләһә, йәштәр һәм айырыуса балалар хаталы атамаларҙы күңеленә һеңдереп буй еткерә. Был иһә, тарихи атамаларҙың юғалыуына тура юл.

Хаталы миҫалдарҙы бик күп килтерергә мөмкин. Мәҫәлән, Урал аръяғы райондарына барыусыларҙың юлы мотлаҡ Елмәрҙәк һырты аша үтә. Бөгөнгө көндә уның был исемен бик һирәктәр "Елмәрҙәк", тип белә, күбеһенең телендә ул "Тещин язык" булараҡ йәшәй.

Бөтә донъяға билдәле Шүлгәнташ мәмерйәһен ҡырҙан килгән ҡунаҡтар ғына түгел, хатта урындағы халыҡтың күбеһе һәм, иң ҡыҙғанысы, экскурсоводтар ҙа "Капова пещера", тип йөрөтә. Мәмерйәнең тәүге атамаһын онотторорға тырышыумы был, әллә шул тиклем битарафлыҡмы - әйтеүе ҡыйын.

Тағы ла бер күңелһеҙ миҫал - Ағиҙел йылғаһының "Белая"ға әйләнеп китеүе. Уны ниндәй телдә лә әйтеүе һис ауырлыҡ тыуҙырмай, ләкин беҙ ныҡышмалы рәүештә Ағиҙел тип әйтеүҙән тайпылабыҙ. Йылға янынан үткәндә йәки уның аша һалынған күпер башында урыҫ телендә "Агидель" тигән яҙыу ҡайҙа бар? Осратҡанығыҙ юҡтыр.

Халҡыбыҙ йыр бағышлаған Төйәләҫ йылғаһы ҡасан һәм ни өсөн Худолаз булып китте һуң ул? Урал йылғаһының тәүге атамаһы Яйыҡ икәнлеген дә онотмаһаҡ ине. Ҡариҙелдең - Уфимкага, Әбйәлилдәге Бөрсөнсө күле - Желтое тигәнгә һәм башҡа бик күп ер-һыу атамалары, ауылдар исеме килде-киттеле итеп тәржемәләнеп бөткән. Бындай миҫалдарҙы бик күп килтерергә була.

Шулай ҙа ыңғай миҫалдар ҙа бар. Мәҫәлән "Дүнәнһуйған" тауы, "Киндерле" мәмерйәһе һәм башҡа ошондай атамаларҙы ла күрергә һәм ишетергә мөмкин әле. Теләк булғанда, тимәк, барлыҡ күрһәткес, алтаҡта, тәбиғәт атамалары, ауыл һәм ҡала исемдәрен дөрөҫ итеп яҙырға була. Бының шулай булыуын дәүләт кимәлендә тикшереп-ҡарап тороу ҙа фарыз, урындағы халыҡтың да битараф булмауы мотлаҡ. Тарихи исемдәрҙең юғалыуына юл ҡуймау бары тик үҙебеҙҙән тора.

Шулай итеп, топонимдар - төрлө объект атамалары ғына түгел. Улар үҙҙәрендә халыҡтың милли үҙенсәлеген, мәҙәниәтен, тарихын һаҡлаған мисәт, бай мәғлүмәти сығанаҡ. Үҙебеҙ уларҙы боҙмайынса әйтергә өйрәнмәйенсә, башҡаларҙан быны талап итә алмайбыҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

✓ *Бүләк алып килә лә ул, тик балалар баҡсаһына килгәне - ысын түгел. Кейенгән кеше генә ул, ысын Ҡыш бабай юҡ, ул әкиәттә генә. Быны мин уның бөтәһенә лә бер төрлө бүләктәр алып килеүенән белдем, оҡшаманы миңә.*



БАЛАЛАР ҠОРО

**Ниндәй була ул бәхетле бала саҡ? Хәҙерге заман ата-әсәләре ошо һорауҙы үҙҙәренә күп тапҡырҙар бирәләр һәм балаларына бер мохтажлыҡһыҙ тормош бүләк итеп, һәр теләктәрен бойомға ашырып, бәхетле итергә теләйҙәр. Ә бына Шамонино ауылының "Ысыҡҡай" балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Айтуған Баймырҙин, Әминә Ҡужина, Наҙгөл Вәхитова һәм Наил Кашапов менән әңгәмәнән һуң, бәхетле бала саҡ - ул һәр баланың үҙ туған мөхитендә тәрбиә алып үҫеүе, тип тә аңланыҡ. Һүҙ - кескәйҙәргә.**

# ТУҒАН МӨХИТЕНДӘ ТӘРБИӘЛӘНГӘНДӘР...

## бәхетле бала саҡ илендә йәшәүселәр улар!

**Һөйләшеүебеҙҙе һеҙ йөрөгән балалар баҡсаһы тураһында башлайыҡ әле. Бында һеҙгә оҡшаймы, күңеллеме?**

**Айтуған:** Эйе, бында Эмиль һәм Таһир исемле дуҫтарым булғанға бик күңелле. Әммә ял көндәрендә өйҙә ял итеп алам - тик кенә ятып торам, төшкөһөн йоҡламайым.

**Наил:** Минең дә дуҫтар бар бында, Кәрим менән Данил мәктәпкә әҙерлек төркөмөнә йөрөй, ә мин әле өлкән төркөмдә генә шөғөлләнәм.

**Әминә:** Мин дә яратам балалар баҡсаһын. Бында тәмле итеп ашаталар, бигерәк тә буҡкалары телде йоторлоҡ. Шулай ҙа балалар баҡсаһына килһәм, өйгә ҡайтҡым килә, өйҙә булғанда, ҡасан балалар баҡсаһына барам инде, тип теләйем.

**Наҙгөл:** Миңә лә оҡшай бында. Бәләкәй Әминә лә йөрөй беҙҙең төркөмдә, ул бында сәй менән икмәк кенә ашай, башҡа бер нәмә лә ашамай. Шул аптырата.

**Айтуған:** Эйе, мин дә аптырайым уға. Ашаһа, яҡшыраҡ булыр ине. Сөнки бер ваҡыт беҙҙә физкультура дәресе булды һәм икмәк менән сәй генә эскән малай иҫен юғалта яҙҙы. Шуға, ашаһаң, иҫеңде юғалтмаҫ өсөн яҡшыраҡ.

**Тәрбиәсе апайҙар һеҙҙе нимәләргә өйрәтә?**

**Әминә:** Әсәйҙәр көнөнә үҙ ҡулдарыбыҙ менән матур бүләк эшләргә өйрәндек. Әсәйҙәр шул тиклем шатланды беҙҙең бүләктәргә.

**Айтуған:** Тәрбиәселәр беҙҙе үҙендә ипле тоторға өйрәтәләр... Ә һеҙ былай тип һорағас, үҙегеҙ балалар баҡсаһына йөрөмәгәнһегеҙҙер инде, ивет? Балалар баҡсаһын уйлап тапмаған саҡ булған тип атайым һөйләгәйне шул.

**Наҙгөл:** Һүрәт төшөрөргә лә өйрәнәбеҙ бында.

**Белемегеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ әле улай булғас. Ҡоштар, йәнлектәр тураһында ниҙәр беләһегеҙ?**

**Әминә:** Ҡоштарҙан мин бөркөттө беләм. Өйҙә ҡуяным бар, уның исеме Ҡупшыҡай. Тағы тиҙҙән этебеҙ буласаҡ, атайым әйтте.

**Наил:** Минең Мухтар тигән этем һәм Ҡарағат тигән бесәйем бар, ә бәләкәй балыҡтарҙың исемдәре бөтөнләй юҡ. Бесәйем ҡап-ҡара ғына, шуға ла ул - Ҡарағат. Ә ҡоштарҙан һарытүш менән ҡыҙылтүш тигәндәрен әйтә алам өҫтәп.

**Әминә:** Минең бер дуҫымдың бесәйе гел уның менән бергә ятып йоҡлай. Беҙҙең дә Мурка һәм Малыш тигән бер иш кенә бесәйҙәр булғайны элек.

**Айтуған:** Ә мин бесәй менән йоҡларға теләһәм, ул гел ҡасып китәсе. Ҡыҙылтүш ҡыш еткәс килә. Тынысльғ күгәрсене була тағы.



**Ниндәй әкиәттәр беләһегеҙ?**

**Айтуған:** Мин "Йомро икмәк" һәм "Сыбар тауыҡ" тигән әкиәттәрҙе беләм. Әкиәттәрҙе миңә әсәйем һөйләй. "Йомро икмәк" һәм "Өс айыу" тигән әкиәттәрҙе бигерәк яратам. Шуныһы ҡыҙыҡ: йомро икмәк ҡаса ла ҡаса, ә уны барыбер тотоп ашайҙар.

**Наил:** "Шалҡан" тигән әкиәтте беләм, унда бабай шалҡан ултырта. "Алтын балта" тигән әкиәт бик оҡшағайны миңә, әсәйем өйҙә булмағанда Хая апай уҡығайны уны беҙгә китаптан, бик матур, ҡыҙыҡ әкиәт. Унда бер ҡарт балтаһын һыуға төшөрөп ебәрә. Һыуҙан бер балыҡ сығып, бөтә балталарҙы күрһәтә лә, ҡарттыҡы табылмағас, уға алтын балта бүләк итә. Быны ҡарттың күршеһе белеп ҡала, йылғаға барып, үҙе һыуға балтаһын ташлай. Аҙаҡ ул бөтөнләй балтаһыҙ тороп ҡала. Тағы ла "Ҡамыр батыр" әкиәтен беләм.

**Әминә:** Балалар баҡсаһында йоҡларға ятҡас, тәрбиәсебеҙ Земфира Даяновна беҙгә әкиәттәр һөйләй. Урал батырҙы ла беләм, ҡартинәй менән ҡартатайҙарҙа уның һүрәте лә эленеп тора.

**Йәнһүрәттәрҙе лә күп ҡарайһығыҙҙыр әле, ниндәйҙәрен яратаһығыҙ?**

**Айтуған:** "Өс бесәй" тигәне оҡшай, мин уны башҡортсаға әйләндерә беләм.

**Әминә:** Мин "Маша и медведь" тигәнен ҡарайым.

**Наҙгөл:** Ә мин йәнһүрәттәр ҡарамайым, телефон һәм компьютерҙа ла уйнамайым. Өйҙә булғанда һүрәт төшөрәм. Сәскәләр төшөрөргә бик яратам.

**Наил:** Быны бер йырлай торған йәнһүрәт бар, уны телефондан да, телевизорҙан да күрһәтәләр. Шуны яратып ҡарайым. Тағы ла "Майнкрафт" уйнарға яратам, унда атышмайҙар, уйнауы ҡурҡыныс түгел. Тағы ла машиналар ярыштырып уйнайым.

**Әминә:** Мин дә ҡайсаҡ телефонда уйнайым, тик атамаларын иҫләмәйем. Сөнки атайымдың телефоны һәр ваҡыт Солтан бабайҙың ҡулында була.

**Балалар, ә ниндәй байрамдарҙы яратаһығыҙ?**

**Айтуған:** Яңы йылды яратам. Көҙ байрамында бейегәйнек, атайым да килгәйне һәм беҙҙең һымаҡ бейегәйне.

**Әминә:** Ҡышҡы һәм йәйге байрамдарҙы яратам. Балалар баҡсаһында һәр саҡ төрлө байрамдар үткәрәләр. Яңыраҡ "Һылыуҡай" байрамында беренсе урын алдым, бейеп күрһәттем.

**Наҙгөл:** Унда мин дә ҡатнаштым, йырланым.

**Наил:** Миңә һабантуй һәм Яңы йыл байрамы оҡшай. Бер һабантуй ауылда ҡартатайҙарҙа үткәйне, бик ҡыҙыҡ булды.

**Ҡыш бабай бүләктәр килтерәме һеҙгә?**

**Наҙгөл:** Эйе, миңә алып килә былай. Гел балконда ҡалдырып китә.

**Наил:** Бүләк алып килә лә ул, тик балалар баҡсаһына килгәне - ысын түгел. Кейенгән кеше генә ул, ысын Ҡыш бабай юҡ, ул әкиәттә генә. Быны мин уның бөтәһенә лә бер төрлө бүләктәр алып килеүенән белдем, оҡшаманы миңә. Быйыл лего Майнкрафт Эндер мир һорайым әле үҙенән, смартфон һораһам, алып килмәҫ инде ул...

**Айтуған:** Ҡыш бабай бар ул. Мин уны Яңы йыл алдынан ҡаршы алам һәр ваҡыт, хатта

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Был йәнле әңгәмәнән һуң, "Ысыҡҡай" балалар баҡсаһының өлкән тәрбиәсеһе Миңзәлә Рәсүл ҡыҙы Ғәйнуллина менән аралашыу форсаты тейҙе. Ул "Ысыҡҡай"ҙа алып барылған эшмәкәрлек тураһында һөйләп, былай тине:*** Бөгөнгә көндә балалар баҡсаһына 330 бала йөрөй, 8 төркөм формалашҡан: әсәһендә - уҡытыу-тәрбиә эштәре башҡорт телендә алып барыла, береһе - ике телдә, дүртеһендә - рус телендә. Беҙҙең балалар баҡсаһына Шамонино ауылы менән бер мәлдә нигеҙ һалынған, 2011 йылда үҙ ишектәрен асты. Бында балаларҙың әхлаҡи һәм илһөйәрлек тәрбиәһенә бик ҙур иғтибар бүленә, башҡорт милли байрамдары, йолалары, халыҡ педагогикаһына йыш мөрәжәғәт итәбеҙ. Ноябрь айында "Һылыуҡай" конкурсын ата-әсәләр менән берлектә бик матур итеп үткәреп ебәрҙек: ҡыҙҙар милли кейемдәрҙә күркәм сығыштар әҙерләне, башҡортса йыр-бейеүгә маһирлыҡтарын күрһәтте.

Ауылыбыҙҙың "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы ағзалары бик әүҙем эшләй, улар менән яңыраҡ "Өләсәйем һандығы" тигән сара сиктәрендә башҡорт өләсәйенең һандығында һаҡланған әйберҙәр тураһында бик мәғлүмәтле, мауыҡтырғыс осрашыу үткәрҙек. Ағинәйҙәр башҡорт аш-һыуҙарын да үҙҙәре бешереп алып килде. Ә балалар үҙ сиратында күстәнәскә башҡортса шиғырҙар, йырҙар, бейеүҙәр башҡарып, өлкәндәрҙең күңелдәрен күрҙе.

Гөмүмән, "Ысыҡҡай" балалар баҡсаһында фольклор байрамдарына баштан уҡ ҙур иғтибар бүленә. Йыл да әҙерлек төркөмөнә күскән балалар менән "Сөмбөлә", "Ҡаҙ өмәһе", "Исем ҡушыу", "Ҡәкүк сәйе" кеүек йола байрамдарын үткәреп торабыҙ. Башҡорт төркөмдәрендә барлыҡ саралар, дәрестәр башҡорт телендә уҙғарыла. Ул төркөмдәрҙә предмет-үҫеш мөхите лә башҡаларҙан үҙенсәлекле булыуы менән айырылып тора: бөтә ерҙә лә башҡорт орнаменттары, башҡортса яҙыуҙар, Башҡортостандың иҫтәлекле урындары төшөрөлгән. Балаларға барыһын да күрһәтеп өйрәтәбеҙ, сөнки улар һөйләүҙе генә ҡабул итеп бармай. Ә бына үҙ күҙҙәре менән күргән, тотоп ҡараған нәмә хәтерҙәрендә ҡала. Шуға балалар баҡсаһында республикабыҙға арналған махсус мөйөшөбөҙ бар, унда барлыҡ кәрәк-яраҡ, көнкүреш әйберҙәре менән йыһазландырылған тирмә лә тора: кәрәк булһа, тәрбиәселәр шунан әйберҙәрҙе алып тора, йәки балалар менән килеп, шунда дәрес үткәрәләр.

Әйтергә кәрәк, беҙгә балалар ике йәшлек сағынан, әле теле лә асылмаған көйө килә. Ата-әсәләр башҡорт төркөмдәренә бик теләп яҙылалар. Әлбиттә, бик һирәктәре генә, теле асылғансы бер телдә генә (ғәҙәттә, рус теленә өҫтөнлөк менән) һөйләшеп торорғоҙ, тигән логопедтар фекеренә ҡолаҡ һалыпмы, шикләнеүҙәрен белдергәне бар. Әммә балалар баҡсаһының бына инде тиҫтә йылдар уңышлы эш тәжрибәһен күреп, был шикшөбһәләре лә юҡҡа сыға.

Өсөнсө йыл билингваль төркөм эшләй. Тәүге йылда уға өлкән әҙерлек төркөмөндә йөрөгән, тәрбиәне рус телендә алған балаларҙы йәлеп иткәйнек. Улар менән береһе урыҫ, икенсеһе башҡорт милләтенән булған тәрбиәселәр эшләне. Төркөмдәге бөтә нәмә русса-башҡортсаға тәржемә ителде, саралар ҙа, дәрестәр ҙә ике телдә алып барылды. Башҡорт телен белмәгән ата-әсәләр ҙә бик теләп йөрөнө, башҡорт конкурстарында еңгән балалар булды. Ул төркөмгә барып инеп, "Здравствуйте!" тиһәң, балалар "Һаумыһығыҙ!" тип яуап ҡайтаралар, йә - киреһенсә. Ә быйыл иң кескәйҙәрҙән йыйҙыҡ бил төркөмгә, уларҙың әле телдәре асылмаған. Шулай ҙа хеҙмәттәштәребеҙҙең тырышлығы, ата-әсәләрҙең теләктәшлеге менән ике телде лә камил белгән балалар үҫеп етер, тигән инаныстабыҙ.

Беҙҙең балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре үҙебеҙҙә, ауылда, Өфө районы һәм республика кимәлендәге сараларҙа, конкурстарҙа бик әүҙем ҡатнаша. Матур ғына еңеүҙәребеҙ ҙә бар, һөйөндөрөп кенә торалар. "Ысыҡҡай"ҙа бөтә белгестәр ҙә бар: 2 музыкаль етәксе, 1 физинструктор, 2 логопед, 1 психолог, 12 тәрбиәсе, уларҙың 8 ярҙамсыһы, шәфҡәт туташы эшләй балалар менән. Балалар баҡсаһының мөдире - Гөлнара Роберт ҡыҙы Ғәбиҙуллина.

**✓ *Шулай ҙа бала, башҡорт теле өйҙә генә кәрәк икән, тигән фекергә килмәҫкә тейеш. Был йәһәттән барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, Өфөлә башҡорт теле үҫешенә ҙур өлөш индереүсе "Тамыр" студияһы бар.***

йоҡламайым. Өйгә килә. Теге юлы Ҡарһылыуһыҙ ғына килгәйне, уныһы ауырып киткән, тинеләр. Ҡарһылыу һыуыҡты ярата ла инде, нисек ауырыны икән тип, аптыраным инде шул ваҡытта. Бәлки, коронавирус эләктергәндер...

**Әминә:** Ҡыш бабайҙы мин дә гел көтәм, ул бүләкте шыршы төбөндә ҡалдыра. Үткән Яңы йылда слайм һорағайным, шыршы төбөндәге коробкала бер түгел, ике слайм булды! Ағайым Яңы йылға самокат һорай, тик өс тәгәрмәсле түгел, ә ике тәгәрмәслене.

**Наҙгөл:** Минең ҡурсаҡтарыма өй алып килгәйне. Тик ул өйҙә уйнатырлыҡ ҡурсаҡтарым юҡ.

**Яңы йыл иртәлегендә нимә эшләйһегеҙ?**

**Айтуған:** Өйрәнгәндәребеҙҙе күрһәтәбеҙ: шиғыр һөйләйбеҙ, бейейбеҙ, йырлайбыҙ. Бер ваҡыт Кеше-үрмәксе булып кейенгәйнем, хәҙер улай кейенмәйем, үҙемдең матур күлдәгемде кейеп киләм.

**Әминә:** Матур күлдәктәр кейеп киләбеҙ. Миндә Ҡарһылыу күлдәге бар. Башҡа байрамдарға башҡорт күлдәген кейеп киләбеҙ, минеке - йәшел, ул элек инәйемдеке булған.

**"Башҡорт теле көнө" тигән байрамды беләһегеҙме? Унда нимә эшләргә була икән?**

**Наил:** Мин белмәгәйнем, һорашырмын әле.

**Әминә:** Ул көндә тик башҡортса ғына һөйләшеп йөрөргә булалыр.

**Балалар, ә һеҙ тәртиплеме ул? Тәртипле кеше ниндәй була?**

**Айтуған:** Эйе, ул насарлыҡ эшләмәй, яҡшы күңелле кеше була инде.

**Әминә:** Тәрбиәле, аҡыллы була.

**Наҙгөл:** Ул яҡшы кеше, әсәһен тыңлай. Мин дә әсәйемде тыңлайым, бешеренергә ярҙам итешәм уға.

**Әминә:** Әсәйемә ҡоймаҡ ҡойорға ярҙам итергә яратам.

**Наил:** Мин дә әсәйемә ярҙам итәм, әле яңыраҡ билмән бөрөштөм, ҡоймаҡ һәм печеньелар бешерештем. Үҙем ҡоймаҡ ашарға ныҡ яратам.

**Тиҫтерҙәрегеҙгә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Наил:** Бөтә ерҙә лә күңелле булһын өсөн үҙҙәренә дуҫтар тапһындар.

**Айтуған:** Насар һүҙҙәр һөйләмәһендәр, артыҡ ныҡ шаярмаһындар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар менән олатай-өләсәйҙәре, атай-әсәйҙәре, ағай-апайҙары, һеңле-ҡустылары тураһында ла һөйләштек. Һәр кеме яҡындарын теҙеп-теҙеп һанап әйтеп үтте, барыһы ла туғанлыҡ терминдарын бик яҡшы белә, яҡындары тураһында ғорурланып һөйләнеләр. "Беҙ - ауыл балалары!" - тинеләр, һөйләшеүгә йомғаҡ яһағандай.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТӘГҮР!

# ҺҮҘҘЕ САБЫЙ ҠАБАТЛАҺА,

## Бәләнән тел ҡотолор...

**ҺОРАУ: Ғаиләлә атай, олатайҙың туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙәге роле ниндәй?**



***Юнир ҺАҒЫНБАЕВ, ҡурайсы, йырсы:*** Туған телгә һөйөү нисек һалына һуң? Барыһы ла ябай ғына - ғаиләлә үҙегеҙ туған телдә һөйләшегеҙ, шул саҡта балаларығыҙ ҙа башҡортса һөйләшәсәк. Беҙҙең Баяс һәм Ғайсар исемле ике улыбыҙ үҫеп килә. Уларҙың теле башҡортса асылды, мин уларға ҡурайҙа көйҙәр уйнаным, башҡортса йырҙар йырланым һәм улар өсөн ошондай мөхит ғәҙәти күренеш булды. Быны аңлы рәүештә эшләнек тип тә әйтә алмайым, башҡорт ғаиләһенә быларҙың барыһы ла хас булырға тейештер. Әсәләре лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Өфөнөң 103-сө мәктәбендә белем бирә һәм уның да бала тәрбиәләүгә ҡарашы минеке менән тура килә. Шуға ла беҙгә еңелерәк булғандыр. Йыраҡ тип торманыҡ, башҡорт балалар баҡсаһына йөрөттөк, хәҙер улар уҡыусы, ҡаланың 20-се Башҡорт гимназияһында уҡыйҙар.

Үҙем дә ауылда, саф башҡорт мөхитендә үҫтем. Өйҙә лә, мәктәптә лә башҡортса аралаштыҡ, уҡытыусыларыбыҙ Зарифа менән Фәттәх Аралбаевтар беҙҙе йырға, бейеүгә, ҡурайға ылыҡтырып, күңелдәребеҙгә рух һалды. Спорт менән дә әүҙем шөғөлләндек. Шулай уҡ ваҡытында шәхсән миңә, тормош иптәшең үҙ милләтеңдән булһын, тип кәңәш биреүселәр булды. Балаға быныһын да әйтергә кәрәктер, сит милләт һинең үҙенде лә, ата-әсәйеңде лә, милли үҙенсәлектәреңде лә тулыһынса ҡабул итә алмай. Шуға ла кәләш һайлағанда ла уның буласаҡ балаларыңды тәрбиәләйәсәк кеше икәнен аңларға кәрәк, егеттәр. Үҙ милләтеңә бала үҫтерәм тиһәң, бер ниндәй икеләнеүҙәр булмаҫҡа тейеш. Хәҙер улдарым башҡорт сәнғәтенә тартыла, ҡурайҙа уйнарға өйрәнәләр, әсәләре лә был шөғөлдәрен хуплап, дәртләндереп кенә тора.

Әле яңы ғына баш ҡалала концерт эшләнем. Унда халыҡ зал тултырып килде. Өфөлә башҡорт мөхите бар бит ул, ошо миҫал да шуны күрһәтеп тора. Ҡалала тыуып үҫкәндәр араһында ла рухлы йәштәр күп, райондарҙан да күсеп киләләр, йорт һатып алалар, балаларын башҡорт мәктәптәрендә уҡыталар. Хәҙер урамда башҡортса һөйләшкәнгә берәү ҙә аптырамай. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың шундай шиғыр юлдары бар:

*"Телде тере тел һаҡлаһа,*
*Һүҙҙе сабый ҡабатлаһа,*
*Бәләнән тел ҡотолор.*
*Телдән төшкән тел юҡ булыр,*
*Телдәге тел ныҡ булыр".*

Беҙ күп, беҙ үҙебеҙҙең телдә һөйләшәбеҙ, балаларыбыҙ ҙа ошо юлдан тайпылмаҫ, моғайын.

***Урал МОРТАЗИН, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** Атайым Хәйрулла Хәбибулла улы билдәле ғалим, математик булһа ла, иҫ киткес йыраусы ла, өҫтәүенә, бына тигән бейеүсе лә ине. Ул телгә лә иғтибарлы булды. Беҙ бәләкәй саҡта шундай шарт ҡуйҙы: өйҙә тик башҡортса ғына аралашабыҙ. Шуға ла беҙ башҡортса һөйләшеп үҫтек. Башҡорт йырҙары, башҡорт бейеүҙәре лә беҙгә үҙенсәлекле мөхит булдырҙы. Мин физик-математик һөнәрен алһам да, бейеүгә булған һөйөүем бөтөнләй икенсе юлдан алып китте. Сибай филармонияһына эшкә килдем, унда иһә барыһы ла тик үҙебеҙсә һөйләшә ине. Мин туған телемде бар камиллығында һәм нескәлегендә Сибайҙа ныҡлап өйрәндем. Ҡыҙыбыҙ ҙа Сибайҙа тыуҙы, шуға ла уның да теле башҡортса асылды. Өфөгә күскәндә ул хатта русса белмәй ҙә ине. Рус телен балалар баҡсаһы өйрәтте. Хәҙер ул инглиз телендә лә иркен аралаша.

Улдарыбыҙ иһә баш ҡала егеттәре, уларға ундай уҡ мөхит эләкмәне, әммә үҙемдең ғаиләмдә лә атайым беҙгә ҡасандыр ҡуйған талапты ҡуйырға тырышабыҙ. Телдәре башҡортса асылды, бына ошоноһо мөһим тип иҫәпләйем. Әле 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында белем алалар, унда ла шул үҙ башҡорттары, үҙ менталитеттарына яҡын булғандар араһында булһындар тигән уй менән биргәнбеҙ. Шулай ҙа хәҙер хәл яҡшырҙы, беҙ үҫкәндә урамда башҡортса һөйләшһәң, ҡырын ҡарай торғайнылар. Бөгөн рәхәтләнеп һөйләшеп йөрөйбөҙ.

Беҙ үҫкәндә ике яҡҡа ла ауылға каникулға ҡайтып йөрөй торғайныҡ. Хәҙер балаларҙы улай оҙаҡҡа ауылға ҡайтарып та ҡуймайҙар. Ҡайтарһалар ҙа, ул балалар өләсәләрен русса өйрәтеп ала. Ә беҙҙең ауылда телмәребеҙ үҙенән-үҙе башҡортсаға күсә лә китә торғайны. Бына ошоға ла иғтибарлы булырға, өләсәй-олатайҙарға ныҡ торорға кәрәк. Бала башҡорт мөхитенә эләкһә, шунда уҡ һөйләшә лә китә ул, сөнки унда уның милли булмышы асыла. Мәрйәм апай Бураҡаева ойошторған "Йәйләү" йәйге лагерына ла балаларын ебәрергә тырышыусылар күп, сөнки унда ана шул мөхит бар. Милли мәҙәниәт аша ла телгә һөйөү һалына, мәҙәниәт аша хатта еңелерәк тә әле.

Ғөмүмән, бөтөн нәмә лә бала саҡта һалына. Атайым үҙе фән эшмәкәре булһа ла, ауылды яратты, ҡайтып йөрөр ине. Һарыҡ һуйыу кеүек ир-егеттәргә хас эштәрҙе лә яратып башҡарыр ине, беҙ ҡарап торор инек. Әле бына "Злой город" тигән тарихи нәфис фильмға төшөп йөрөйөм. Бер көндө төшөрөү командаһы "Кем һарыҡ һуя белә?" тип һораны. "Мин", тием быға тиклем һуйғаным булмаһа ла. Бер ҡалмыҡ егете менән һарыҡты бәйләнек тә, ҡиблаға ҡаратып һалып, бисмилламды уҡыным да, салдым. Унығын киноға төшөрмәнеләр, Батый хан осорон һүрәтләгән тарихи фильмда былай ҙа ҡан күп тигән фекергә килделәр, ә бына элеп тунаған сағым эләкте. Ҡалала үҫһәм дә, ауыл менән бәйләнеш булғас, мин быны эшләй алдым. Бына шулай үҙ мәҙәниәтеңде, ғөрөф-ғәҙәттәреңде, телеңде белһәң, бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясаҡбыҙ.

***Таһир КҮЗБӘКОВ, IT-белгес:*** Ғаиләлә барыһы ла мөһим. Баланды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә, ти халыҡ, һәм бик дөрөҫ әйтә. Шуға ла телгә һөйөү тәрбиәләп алайым әле, тип кенә китап уҡыу, башҡортса йәнһүрәт ҡарауҙан эш ыңғайға үҙгәрмәйәсәк. Үҙең өлгө булырға тейешһең. Өйҙә башҡортса аралашайыҡ, балаларҙың теле туған телендә асылһын, атай менән әсәй үҙ-ара үҙ телендә һөйләшһен - былар һәр кемебеҙҙең хәленән килә торған эш. Бәләкәйҙән ишетеп, һөйләшеп үҫмәһә, ҙурайғас, ул теләһә лә башҡортса аралаша алмаясаҡ. Өс ул үҫтергән йәш атай булараҡ шуны ла әйтер инем: ир бала өсөн атай айырыуса өлгө. Атанан күргән уҡ юнған, тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәй, уларҙың киләсәктә ниндәй шәхес булып китеүҙәре минән дә тора икәнен аңлап ҡабул итәм һәм был яуаплылыҡтан мин үҙем дә үҫәм.

Нисек кенә булмаһын, кеше үҙе тәрбиә алған ғаиләһендәге йолағәҙәттәрҙе үҙ ғаиләһенә лә күсерә. Мин баш ҡала шарттарында үҫкән ҡала егете, бәлки, ул саҡта Өфөлә үҙебеҙ теләгән милли мөхит булмағандыр ҙа. Әммә был мөхит өйҙә булды. Беҙ тик башҡортса ғына аралаштыҡ. Милли әҙәбиәт, мәҙәниәт, йолалар тигән төшөнсә, башҡорттарға ғына хас туғандар менән яҡындан аралашып йәшәү беҙгә ят булманы. Минең башҡортса һөйләшкәнемде ишеткән өлкән апай-ағайҙарҙың: "Ҡалала йәшәп, нисек улай башҡортса яҡшы һөйләшә һуң?" - тип аптырауҙарына үҙем аптырай инем. "Ҡала балаһы ни эшләп телде белмәҫкә тейеш икән?" - тип эстән генә ғәжәпләнәм. Үҫә биргәс кенә телен белмәгән башҡорттар ҙа булғанын күрҙем. Бөгөн үҙемдең балаларым менән башҡортса аралаша алғаным өсөн атай-әсәйемә ныҡ рәхмәтлемен. Улдарымдың олатай, өләсәй тип өҙөлөп тороуҙарынан да кинәнес кисерәм. Хәҙер инде улар ейәндәрен тәрбиәләүҙә әүҙем ҡатнаша.

Балалар бәләкәй саҡта әлегә өйҙә төп талап - улар менән башҡортса аралашыу. Кәләш менән был мәсьәләлә күптән килешеп ҡуйғанбыҙ. Артабан балалар баҡсаһында, мәктәптә үҙ телебеҙҙә тәрбиә алыуҙарын, уҡыуҙарын тәьмин итеү ҙә ҡулдан килгән эштер, тип уйлайым. Үҙебеҙ телде белеү, һаҡлау өсөн ныҡышмалылыҡ күрһәтмәһәк, быны беҙҙең өсөн бер кем дә эшләмәҫ.

***Фәнил БҮЛӘКОВ, шағир, З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры:*** Әсә теле, туған телгә әсәй өйрәтергә тейеш, тиһәк тә, был мәсьәләлә атайҙың роле лә ҙур. Әсәй генә түгел, атай теле лә ул. Ғаиләлә атайҙың абруйы бар икән, ул телгә ихтирам менән ҡарай икән, баланың да телгә ҡарата хөрмәте ҙур буласаҡ. Минең кәләшем Силәбе өлкәһендә тыуып-үҫкән, башҡортса уҡымаған, әммә ул, минең балалар башҡортса белергә тейеш, тигән ҡарашымды ихтирам итеп, үҙе лә телде бар камиллығында өйрәнде. Ике өлкән ҡыҙыбыҙ районда йәшәгәндә тыуҙы, бәләкәсе ҡала мөхитендә үҫте, өсөһө лә башҡортса һөйләшә, башҡорт булыуҙары менән ғорурлана һәм был тап ғаиләнең тәрбиә һөҙөмтәһе. Өйҙә тик башҡортса ғына аралашабыҙ, тигән шарт ҡуймайым, ике телдә лә иркен, таҙа һөйләшәләр.

Шулай ҙа бала, башҡорт теле өйҙә генә кәрәк икән, тигән фекергә килмәҫкә тейеш. Был йәһәттән барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡарарға кәрәк. Мәҫәлән, Өфөлә башҡорт теле үҫешенә ҙур өлөш индереүсе "Тамыр" студияһы бар. Ул башҡорт телен бөтөнләй икенсе кимәлгә күтәрә, телевизор аша башҡортса һөйләшеп тороу баланы ла үҫтерә. Бәләкәсе вокал төркөмөнә лә йөрөй, телде йыр-моң аша ла өйрәнә, туған теленә хөрмәт тойғоһо арта. "Атай, әйҙә, тик башҡортса ғына һөйләшеп алайыҡ", тип үҙе өндәшә ул ҡайһы саҡта. Башҡорт теленән өйгә эште бергәләп әҙерләйбеҙ, уҡып ултыра, үҙе руссаға тәржемә итеп ҡарай. Йәғни, беҙ башҡорт телен көсләп, талап итеп өйрәтмәйбеҙ, уларҙың үҙҙәренең ҡыҙыҡһыныуы бар. Ошоларҙы бергәләп эшләү, атайҙың да тәрбиә эшендә әүҙем ҡатнашыуы уға телде тағы ла нығыраҡ өйрәнеүгә ынтылыш бирә. Унан һуң, билдәле, туған телен ятҡан бала халҡын, республикаһын яратып үҫә, телде, мәҙәниәтте белгәндең күңеле байыраҡ була, күп телдәр белгән һайын фекерләү ҡеүәһе лә нығыраҡ үҫешә. Баланың арҡа һөйәге ғаиләлә нығына, тормошҡа ла ҡарашты ғаилә тәрбиәләй. Туған тел - ул ҙур байлыҡ, ошоно ла атай менән әсәй аңлап, ғаиләлә үҫтерергә тейеш.

**Ләйсән ВӘЛИЕВА яҙып алды.**

ФЕКЕРЛӘШЕП...

# ТУҒАН ТЕЛДЕ БЕЛМӘГӘНГӘ...

## тәнҡит менән ҡарайбыҙ

**Һәр кемдең туған, әсә теле бар. Тик...кемдер уны белмәй, йә оноткан, йә өйрәтмәгәндәр. Ҡай берәүҙәр үҙенең алйотлоғо, наҙанлығы арҡаһында туған теленә хыянат иткән. Бар ундайҙар ҙа. Бар ғына түгел, ундайҙар иҫәбе арта бара. Ниһәһе һәйбәт: туған телен тапҡандар, асылына кире ҡайтҡандар бар. Шундайҙарҙың иҫәбе артһын, тип теләйек бөгөнгө глобалләшеү осоронда. Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрының халыҡ артистарынан: "Театр туған телгә һөйөү тәрбиәләйме?"- тигән һорауға яуап биреүҙәрен үтендек:**

***Рәмилә Хоҙайғолова:*** Атаҡ! Тәрбиәләй, әлбиттә. Туған тел үҙе бер мөғжизә бит ул! Бала саҡта Салауат театры спектаклдәрен ҡарап, тыңлап үҫтем. Кино сәнғәтенә өҫтөнлөк биреүселәргә, нимә генә тиһәгеҙ ҙә, театр барыбер ҙә үҙенсәлекле, тип әйтер инем. Унда һәр бер актерҙың хәрәкәтен күҙәтеп, һәр һүҙен йотлоғоп тыңлайһың һәм мөкиббән китеп, хайран ҡалып, телгә ғашиҡ булаһың. Минең үҙем менән шулай булды. Сибайға килгән һәр бер театрҙың спектаклдәрен ысын күңелдән ихлас ҡарайым, тел мөғжизәһен көтәм. Тик, ҡыҙғаныҫҡа, хәҙер туған телебеҙҙә үҙәккә үтерлек итеп яҙған драматургтарыбыҙ юҡ. Элек ундайҙар үҙҙәре беҙгә өҙлөкһөҙ киләләр, пьесаларын уҡыйҙар ине. Фекер алыша, бәхәсләшә торғайныҡ. Шул осорҙо һағынам.

***Зифа Баязитова:*** Театр мотлаҡ туған телгә һөйөү тәрбиәләй. Артистарҙың телмәре образды асырға ныҡ ярҙам итә, залдағы тамашасы менән сәхнәлә уйнаған артистың күңеле уның теле аша, телмәре аша берләшә. Шунда ғына тамашасы персонаждың нимә әйтергә теләгәнен, образға ниндәй мәғәнә һалыныуын уның теле арҡаһында, телдең күңелгә тәьҫир итеүе арҡаһында йөрәге менән аңлай. Шуға ла мин туған телебеҙгә ныҡ иғтибарлымын: ике кеше һөйләшкән ваҡытта, ошоно башҡортса матур итеп әйтеп булмай инеме ни, аңлайышһыҙ һүҙҙәр менән фекерен бутап торғансы, тип үртәләм, үҙ фекеремде үҙ туған телемдә әйтергә яратам. Шуға ла минә ошо һөнәрем яҡындыр.

Шул тиклем тәнҡит менән ҡарайым башҡортса һөйләшә белмәгән кешеләргә. Ҡай саҡ, их, иҫ киткес матур итеп һөйләне, теле шул тиклем моңло, персонажына тура килеп тора, тип һоҡланам. Образды асҡанда бит һәр береһенең айырым нескәлектәре була, бигерәк тә әсә образында йомшағыраҡ телле булырға кәрәк. Шуға күрә лә туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә театр иң беренсе урында тора. Әлбиттә, әҙәби әҫәрҙәрһеҙ, авторҙарһыҙ, пьесаларһыҙ театр булмай, әммә театрҙың роле ҙур, тигәнде беренсе урынға ҡуям. Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, беҙҙең театр артистарының телмәрен һәр ваҡыт юғары баһалайҙар, Сибай театры артистары башҡортса матур һөйләшәләр, халыҡсан театр, тиҙәр. Әммә халыҡсан театр, тигәнде күптәр халыҡ театры менән бутайҙар. Бутауҙарына ла үпкәләмәйем, сөнки халыҡ театрына ла телебеҙгә мөкиббән булып ғашиҡ булған кешеләр йөрөй. Беҙҙе халыҡсан театр тип әйтәләр икән, тимәк, халҡыбыҙҙың теленән, уларҙың күңеленән бөтә моңло ынйыларҙы йыябыҙ. Беҙ халыҡҡа яҡын телдә үҙебеҙҙең уй-фекерҙәребеҙҙе теге йәки был образ аша, автор, режиссер нимә әйтергә теләгән, шул моңдо, теләкте, маҡсатты туған телебеҙҙә еткерә алабыҙ.

***Нурзиә Әбдрәшитова:*** Әлбиттә, тәрбиәләй. Көҙ көнө Флорид Бүләковтың "Их, күгәрсенкәйҙәрем!" лирик комедияһы менән Иглин районына барҙыҡ. Бер бәләкәй генә ауылдың сәхнәһендә уйнайбыҙ. Баҡтиһән, спектаклгә телсе ғалимә ханымдар ҙа килгән икән, беҙ быны алдан белмәнек. Улар беҙҙең тамашаны ҡарап ҡайтҡас, аптырағандар, беҙ үҙебеҙҙең башҡорт телебеҙ менән яңынан осраштыҡ, тигәндәр. Был спектаклдә беҙ, оло актерҙар, уйнайбыҙ, сәхнә телебеҙгә ярты быуаттан ашып китә. Беҙ элеккеләргә, боронғоларға инәбеҙ, шуға ла телебеҙҙе, моңобоҙҙо, фекеребеҙҙе туған тел аша һаҡлап килә алабыҙ, беҙҙең өсөн ул үҙе бер ҙур байлыҡ. Киләсәктә лә һаҡлап ҡалырға ине ошо ҡиммәтте, балаларыбыҙҙың балаларына, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә бирергә, үҙебеҙҙең ҙур тәжрибәбеҙҙе ҡалдырырға ине. Туған телебеҙҙе яратҡан театрыбыҙ аша халыҡҡа еткерергә, шатлыҡ итеп яңынан ҡайтарырға, тергеҙергә ине, сөнки күп ҡиммәтле сифаттарыбыҙҙы юғалта барабыҙ бит.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

ҺӨЙЛӘШТӘР

# ҪЫЙЫРҒА ҪАЛАМ ҪАЛҒАНДА,

## йәки "Ҫөйләш" фестиваль-марафоны тураһында

**"Үҙебеҙсә рәхәтләнеп ҫөйләшәйек әле бөгөн! Әтеү ғүмер буйы ҫаҡау Дим буйҙары, тигәнгә ҡыйынҫындыҡ. Ә бит оялырға түгел, ҫөйләшебеҙ үҙенсәлекләрен ғорурланып ҡулланырға булған!" "Ҫөйләш" фестиваль-марафоны башланғандан алып ошондайыраҡ фекерҙәрҙе күп ишетергә тура килде. Башлыса оло быуын вәкилдәренең әйткәне күңелгә инә. Уларҙың берсә мәрәкәле, берсә аптыратырлыҡ хәтирәләрен тыңлап, тарихҡа күҙ һалабыҙ, телебеҙҙең һәм тыуған яҡ яҙмыштарының айырылғыһыҙ икәненә тағы бер иманабыҙ.**



"Ҫөйләш" фестиваль-марафоны 14 сентябрҙә Дәүләкән районында старт алды. Уның сиктәрендә башҡорт ауыл биләмәләрендә төрлө форматтағы саралар үткәреү ҡаралғайны. Араһында ғилми йүнәлештәге "Ҫөйләшемдә - үткәннәр" түңәрәк өҫтәле; "Йолаларҙа - ил яҙмышы", "Туған яҡ моңнары" музыкаль-саралары; "Нәнәйем әкиәттәре" кисәһе. Шулай уҡ "Сәхнә теле", "Шиғри һүҙ" һ.б. осрашыуҙар. Исемдәренән үк күренеүенсә, был саралар башҡорт теленең Дим һөйләшенә төрлө яҡлап күҙ һалыуға йүнәлтелгән. Шул уҡ ваҡытта Дим-Өршәк, Асылыкүл буйы башҡорттарының рухи ҡомартҡыларын барлау, фольклор материалдарын туплау, мәҙәни мираҫыбыҙ менән йәш быуынды таныштырыу ҙа проекттың төп маҡсаттары иҫәбендә.

Башҡорт теленең Көньяҡ диалектына ҡараған Дим һөйләше буйынса махсус фестиваль беренсегә үтә. Был проект - телебеҙҙе һаҡлау эшендә мөһим аҙым, тиһәк тә хата булмаҫ. Әйткәндәй, Дим һөйләше Башҡортостан Республикаһының Әлшәй, Архангел, Ауырғазы, Бәләбәй, Бишбүләк, Дәүләкән, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Нуриман, Өфө һәм Шишмә райондары территорияһында таралған. Мең, көҙәй, ҡобау ырыуҙары, шулай уҡ өлөшләтә - ҡаңлы һәм ҡаршин ырыуы башҡорттары Дим һөйләшендә аралаша. Йәғни, ул башҡорт теленең иң ҙур һөйләштәренең береһе.

"Ҫөйләш" фестиваль-марафоны старт ала, тигән хәбәр ишетелгәс тә, ул ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Радио, телевидениела, социаль селтәрҙәрҙә фекер алышыуҙар ойошторолдо. Башлыса: "Һөйләш үҙенсәлектәре бөгөн һаҡланамы һуң?" - тигән икеләнеүҙәр күп булды. Проектты башлар алдынан ойоштороусылар ҙа ошо һорау өҫтөндә уйланды. Һәм беҙ бер ни тиклем күҙәтеү һәм тикшеренеү эше алып барҙыҡ. Уның сиктәрендә төрлө йәштәге кешеләр менән аралашыу ойошторолдо, аудио-видеояҙмалар ҡулланылды, шулай уҡ һуңғы йылдарҙа ошо төбәктә әҙерләнгән радио-ТВ тапшырыуҙары анализланды. Һөҙөмтә күрһәтеүенсә, Дим һөйләше юғалмаған ғына түгел, әүҙем ҡулланыла ла. Бигерәк тә оло быуын вәкилдәренең телмәрендә фонетик, морфологик үҙенсәлектәр сағыу яңғырай.

Дим һөйлешенең төп үҙенсәлеге - ул әҙәби телдәге "һ", "с", "ш" өндәре урынына күпселек "ҫ" өнөнөң ҡулланылышы. Быға проекттың атамаһы ла ишаралап тора. Мәғәнәүи яғынан ҡарғанда ла "Ҫөйләш" һүҙе юҡҡа һайланманы. Ул тәү сиратта "Дим Ҫөйләше", икенсенән "Ҫөйләш!" - тыуған телендә аралаш тигәнде аңлата.

Белеүебеҙсә, әҙәби тел нормаларына ярашлы "ҫ" өнө һүҙ башында килмәй. Ә Дим һөйләшендә ул элек-электән хатта кеше исемдәрендә лә ҡулланылған (Ҫөләймән, Ҫибәт һ.б.). Быны төрлө йылдарҙа төбәктә тупланған экспедиция материалдары дәлилләй. Әйткәндәй, был үҙенсәлеккә бәйле бихисап мәрәкәле әйтем-лаҡаптар ҙа һаҡлана халыҡта. Фестивалде асыу тантанаһында, мәҫәлән, Минислам Солтанғәлиев ошондайын әйтте:

*"Ҫыйырға ҫалам ҫалғанда*
*Ҫәнәк ҫабы ҫынып сыҡты.*
*Ҫәнәк ҫабын ҫаплағансы,*
*Ҫыйырым сығып ҡасты".*

Икенселәр:
*"Ҫыу буйында ҫуғаным,*
*Ҫыу ҫиптеңме, туғаным?"* - тиҙәр.

Ә бәғзеләр көйләп үк ебәрә:
*"Ҫары, ҫары, ҫап-ҫары,*
*Ҫары бәке ҫаплары.*
*Мин ҫарғаймай кем ҫарғайҫын,*
*Килмәй сәләм хатлары".*

Һөйләштең лексик үҙенсәлектәре бигерәк тә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Мәҫәлән, тызый (бал ҡорто), сәпсек (турғай), кәкере (ваҡ бәлеш) һ.б. һүҙҙәрҙе күп яҡта аңлап та етмәйҙәр. Ҡыҙыҡ өсөн социаль селтәрҙәге "Ҫөйләш" төркөмөндә "кәлкүн" (качели) һүҙе, уның башҡа яҡтарҙағы атамаһы тураһында һораулама урынлаштырғайныҡ. Баҡтиһәң, республикабыҙҙың башҡа төбәктәрендә генә түгел, хатта күрше ауылдарҙа ла уны төрлөсә атайҙар икән. Был, әлбиттә, яңы һорауҙар тыуҙыра, киләсәктә эҙләнеү һәм тикшеренеү өсөн яңы офоҡтар билдәләй.

Проект сиктәрендә ойошторолған һәр сара телдең үҙенсәлектәрен барлауға ғына түгел, урындағы топонимдар, ауыл тарихтарын туплауға ла йүнәлтелде, киләсәктә ошо төбәктең топонимик һүҙлеген булдырыу мәсьәләһе лә ҡаралды. Фестиваль-марафон барышында Асылыкүл, Дим-Өршәк буйы башҡорттарының музыкаль әҫәрҙәре лә сәхнәгә сыға килә. Бында һаҡланған, һирәк яңғырашлы йырҙарҙың күплеге, йола элементтарының сағыулығы шулай уҡ төбәктең бай тарихы тураһында һөйләй.

"Ҫөйләш" фестиваль-марафоны 14 декабргә тиклем дауам итә. Был - ошоноң менән эш тамамлана тигән һүҙ түгел. Проект бик күп фекерҙәр, һорауҙар, хатта бәхәстәр тыуҙырҙы. Был ыңғай күрһәткес, әлбиттә. Ошондай аралашыуҙар һөҙөмтәһендә күптәр һөйләше менән ҡыҙыҡһына башлай, диалект үҙенсәлектәре менән таныша, алған мәғлүмәтте өлөшләтә булһа ла хәтеренә һалып ҡуя, башҡаларға еткерә. Туған телебеҙҙең тәрәнлеген, сағыулығын асыуға, уны һаҡлауға йүнәлтелгән "Ҫөйләш" проектына матур яҙмышлы, яҡты киләсәкле, иң мөһиме, "ҫөҙөмтәле" булыуын теләйек.

**Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА,**
**филология фәндәре кандидаты, шағирә.**

***✓ Бер кем дә һине ғәйепләмәй. Киреһенсә. Ул егеттең атаһы районда ҙур түрә, ағаһы баш ҡалала, ә һине яҡларлыҡ бер кемең юҡ, шуға ла үҙеңдең ғәйепһеҙ икәнеңде иҫбатлай алыуың бик икеле. Шәп адвокат тап эшеңде отҡоң килһә.***




- Миңә автобус туҡталышынан район үҙәгенә ун ике саҡрым тигәйнеләр. Кисәнән бирле шул араны өс мәртәбә атлағанымдыр, ә һеҙ йәнә ун тип тораһығыҙ.

- Ниндәй туҡталыш? Был тирәлә бер ниндәй ҙә туҡталыш юҡ. Һин һораған район үҙәгенә шул сама, - көтөүсе тауышында йәнә ҡәнәғәтһеҙлек сыңланы. Үҙенә ҡаршы әйткәнде яратмағаны күренеп тора ине. Бәлки, йоҡоһо ла бөтмәгәндер, кисә ныҡ ҡына төшөргәнгә лә оҡшай - йөҙө шеш. Мал менән йөрөп үҙе лә малға әйләнеп бөткән, күрәһең. Ул ҡулын ҡарайып, шуға ла шомло булып күренгән урман яғына һелтәне лә урынынан ҡуҙғалды һәм һайт-һайтлап байтаҡ йыйылған мал-тыуарҙы ҡыуа ла башланы. Шунан ҡапыл туҡтаны ла:

- Һин тилбererәк атла, әтеү өлгөрмәүең бар. Эй, былай ҙа һуңланың инде, - тип өҫтәп ҡуйҙы.

- Нимәгә һуңланым?

- Бәй, районға тиһең дә? Судҡа китеп бараһың түгелме ни?

- Эйе..

- Шулай булғас...

- Ә һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ? - Әсләмдең аптырауының сиге юҡ ине.

- Был донъяла, егет кеше, һәр кем ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен белеп тора. Бөтә айырма шунда: берәүҙәр был хаҡта һөйләй, икенселәр белһә лә өндәшмәй, - көтөүсе мыҫҡыллы ғына йылмайҙы, йәнәһе, көтөүсе генә булһам да донъялағы серҙәргә мин дә хәбәрҙармын. - Әммә һин үҙеңдекен иҫбатлай алмаясаҡһың. Ҡара көстәр берҙәм, ә ғәҙеллек тарҡау. Ғәҙеллек юҡ ул, ул барҙыр, ләкин түрә-ҡара, аҡсалы бәндәләр уны тыуыу менән йотоп тора. Ай, хаҡлыҡҡа юлың алыҫ, егет кеше, - көтөүсе һүрән генә йылмайҙы ла һайт-һайтлап көтөүе артынан ҡуҙғалды.

Әсләм ергә ҡаҙаҡланған бағана кеүек ҡатты ла ҡалды. Ҡайҙан белә икән һуң был ҡартлас: радио йәки телевизор аша хәбәр иткәндәрме, әллә эҙләүҙәре тураһында иғлан биргәндәрме? Унан шул тиклем дә ҙур яңғыраш алған эшме ни инде? Алдан берәйһе хәбәр иткәндер тиһә, уны юлда уҙыусы булманы. Ул ғына түгел, бөтә донъя хәбәрҙар, ти ҙәһә. Туҡталыштағы ҡағыҙҙы уҡығандыр, тиһәң? Хәйер, ул туҡталыш ҡайҙа ҡалды, Әсләм үткән урман юлы аша көтөүсе шул яҡҡа барып йөрөй буламы? Улай тиһәң, бетон ҡоролма эсе мал-тыуар тиҙәге менән туп-тулы ине. Берәйһе генә килеп әйтмәһә. Уныһы ла бик икеле. Минең судҡа барырға тейешлегем кемгә кәрәк тә, кемгә ҡыҙыҡ? Һәр кем үҙенең донъяһында ғына көн иткәндә, кемдеңдер ҡайҙалыр китеп барыуы бер кемгә лә хәжәт түгел.

Көтөү баҡырыша-баҡырыша ауыл осона китте, малдарын алып килгән бала-саға, әбей-һәбей, ҡатын-ҡыҙ яйлап таралышты. Нишләргә, көтөүсе күрһәткән тарафҡа ҡуҙғалырғамы, әллә кире боролорғамы, тип йәнә икеләнеп торҙо Әсләм. Унан иртәнге ысыҡтан лыс һыу салбар балаҡтарына, йүкә ағасының нәҙек ботаҡтары менән уратып бәйләгән туфлиҙарына ҡараны ла, үҙен бер меҫкен итеп тойҙо. Бөгөн бит-йөҙөн йыуымаған да хатта. Ә бармағы һыҙлай, һыҙлай ғына түгел, бөтә аяғы зәңкей хәҙер. Тиреһе һыҙырылып сей ите ҡыҙарып тора. Ҡулъяулығын да бәйләп ҡараны, еңеллек килмәне барыбер. Шешеп ҡуймаһа ярар ине лә. Көтөүсе район үҙәгенә кәзә һуҡмағынан алты-ете саҡрым тиһә лә, йыраҡыраҡ булыуы ла ихтимал - Әсләм хәҙер был яҡтағы саҡрымдарға һис ышанмай. Үлсәү берәмектәре бөтөнләй икенсе. Автобустан төшкәс тә күпме атланы, ун уҡ булмаһа ла әлеге алты-ете генә йыйылғандыр, ә был көтөүсе шул сама тип тора. Кемгә ышанырға?

Ауылдың икенсе осона сығып еткәнсе, көтөүсе әйткән кәзә һуҡмағын урамда осрағандарҙан һорай-белешә атлаһа ла, барыбер ҙә теүәл белеүсе булманы. Берәүҙәр, шул тирәлә инде, тип урман яғына иҙәне, икенселәр ат юлынан башҡа юл юҡ ул, тип иҫбатланы, өсөнсөләр тәүгә ишетәмсе, тип яурын йыйырҙы, дүртенселәр бөтөнләй өндәшмәне, хатта туҡтаманы ла. Белмәүҙәренә иҫе китә Әсләмдең, ышанмай, иҫәрҙәр былар, бөгөн, егерме беренсе быуат башында, шундай кешеләр ҙә булыр икән, тип аптырай. Әйтерһең дә, урыҫ староверҙары һымаҡ ил сигендәге тайгала йәшәп яталар. Уның ҡайҙа китеп барыуын ошо ауыл көтөүсеһе лә белгәс, былар ҙа беләлер, шуға һөйләшкеләре килмәй, тип тә уйлай. Ә күрше ауылды, үҙҙәренең район үҙәген, нисек белмәҫкә мөмкин икән һуң? Бынау заманда бер ҡайҙа сыҡмай, йөрөмәй, ҡыҙыҡһынмай, хәбәрҙар булмай үҙ ауылдарында ғына бикләнеп йәшәргә буламы икән ни?

Алты-ете саҡрым тиһә лә, ғәжәп, ара көтөүсе әйткәндән яҡыныраҡ булып сыҡты. Әммә ул иртәрәк шатланған: ауылға ингәс тәүге осраған кеше - әбейҙән ауылдың исемен белешкәйне, юҡсы, нишләп улай булһын, беҙҙең ауыл шулай тип аталасы, тип бөтөнләй икенсе атаманы әйтте ҡуйҙы! Саҡ йығылып китмәне Әсләм. Ниһайәт, килеп еттем, тип нисек шатланғайны! Ә шул район үҙәге ҡайҙа һуң, бынан йыраҡмы, тигәнгә, бәй, белмәйемсе, тәүгегә ишетәм, был тирәлә ундай үҙәк юҡ, беҙҙең икенсе район, тип һалмаһынмы! Мөғжизә, тек мөғжизә. Ниңә, ундай атамалы ауыл бөтөнләй юҡмы әллә? Һәм ул бушҡа эҙләп йөрөй булып сығамы?

Артабан нишләргә икән һуң, район үҙәген эҙләп һаман барырғамы, әллә кире боролорғамы? Эҙләһәң, табылырына бер ышаныс юҡ, ҡайҙа барып төртөлһәң дә белмәйемдән һалдырасаҡтар, кирегә боролһаң - юлды хәтерләмәй, аҙашасаҡ. Шунан йөрө ҡара урмандан сыға алмай.

Ҡапыл ҡайҙандыр бер йәш егет пәйҙә булды ла иҫәнләшеп тә тормай:

- Эй, тартырға бир әле! - тип өндәште.

- Тартмайым, - тип яуапланы Әсләм, көләмһерәп. - Һиңә лә шуны теләйем.

- Миңә һинең теләгең кәрәкмәй, миңә тәмәке кәрәк, - тине егет дорфа ғына. Унан ҡулдарын кесәһенә тығып бөршәйҙе. - Тартҡы килә, баш та сатнай. Тәмәкең юҡ икән, давай ярты лыҡ аҡса бир. Кисә артығыраҡ тейәлгән, срошны төҙәтер кәрәк.

- Тек һиңә тәмәке кәрәкме, әллә ярты лыҡ аҡсамы?

- Икеһе лә. Тәмәкең юҡ, уныһын әйттең, давай, аҡса. Уныһы бар.

Әсләм уйға ҡалды. Әлбиттә, аҡсаһы бар, юлға аҡсаһыҙ сығамы кеше, тик бынау оятһыҙ бәндәгә нишләп бирергә тейеш һуң әле?

- Ниңә өндәшмәйһең? Аҡсаң юҡмы әллә? Воопще, һин кем ул? Бер ҙә беҙҙең яҡ кешеһенә оҡшамағанһың, - егет ишараты ҡулдарын кесәһенән сығарҙы, күҙҙәрендә асыу шәйләнде. - Аҡса, тим! Ниңә аңшайҙың? Йәһәт бул! Юҡһа, иптәштәрҙе саҡырам. Бер һыҙғырыуым етә. Улар минең һымаҡ һорап тормаясаҡ, аҡыртып талап аласаҡ.

Егет шаярмай ине. Бәләһенән баш аяҡ, тип уйланы ла Әсләм, салбар кеҫәһенән ике йөҙ һумды сығарып, һондо. Егет рәхмәт тә әйтмәй дуға кеүек кәкре аяҡтары менән өйрәк ише алпан-толпан баҫып китеп тә барҙы.

Әсләм бараһы ерен ҡарай-ҡарай килә ине, ауыл осона ла килеп сыҡты. Теүәл генә береһе лә әйтә алманы район үҙәгенең ҡайһы тарафта икәнен. Ғәжәп ине ауыл халҡының уны белмәүе. Ошо район биләмәһендә йәшәйҙәр, ә үҙәкте әйтә алмайҙар. Йомош-фәләнгә юлдары төшмәйме икән ни? Әйтәйек, магазин, справка, туған-тыумаса. Автобус бәйләнеше лә тойолмай, кеше лә осрамай. Үҙ өйөндән сыҡмай, кеше менән аралашмай көн ит инде ошо заманда...

Арба юлынан атлап ташландыҡ ырҙынға еткәйне, туҡта, эй, туҡта, тип һөрәнләгән тауыштар ишетеп артына боролдо. Боролғайны, өс егеттең кемуҙарҙан үҙенә ҡарай йүгереүен күрҙе. Ҡул болғайҙар, һөрлөгөп йығылып та китәләр, ҡалҡынып йәнә йүгерәләр. Аҡса алған егеттең этлеге. Тимәк, барыбер ҙә өлкәнерәк иптәштәрен ҡотортоп ебәргән! Әсләм аҙымдарын ҡыҙыулатты, әммә арыған, туфлиҙары аяуһыҙ ҡыҫҡан аяҡтарын һөйрәп шәп китә алманы - йөҙ-йөҙ илле метр үтә алдымы, юҡмы, иҫерек егеттәр уны ҡыуып та етте.

- Ҡайҙа ҡасаһың? - тине береһе, бышлыға-бышлыға. - Кем һин?

Күлдәге салбары тышына сыҡҡан, сәстәре тирләгән маңлайына йәбешкән, кәм тигәндә аҙна самаһы ҡырынмаған был кешенән мәрхәмәт көтөрлөк түгел. Эсеүҙән йөҙө кәкрәйеп, салшайып бөткән.

Әсләм өндәшмәне. Нимә тиһен? Ҡурҡыта алмай, тиргәшә алмай, һуғыша алмай. Былар өсәү, ул бер үҙе. Шул ауылдан, эш менән район үҙәгенә китеп барам, тине.

- Ҡайҙа? - тип хихылданы егеттәрҙең береһе, аптырағандай итеп.

- Ниңә алдайһың? Был тирәлә ундай район үҙәге юҡ. Беҙҙең район үҙәгенең исеме шулай. - Егеттәрҙең икенсеһе исем атаны. - Ул бөтөнләй икенсе яҡта.

- Нисек... икенсе яҡта? Миңә ошо юлды өйрәттеләр, - хәҙер Әсләм аптырай.

- Алдағандар. Был тирәлә ундай ауыл юҡ.

- Ә ҡайҙа һуң? - Әсләм йәнә район үҙәгенең исемен атаны. Ғәжәпләнеүенең сиге юҡ ине.

- Давай, һин беҙгә допрос ойошторма. Ҡайҙа китеп барыуың беҙгә кәрәкмәй, хет Ҡаф тауҙары аръяғына кит, беҙгә ярты лыҡ аҡса бир. Юҡ, тимә, барлығын беләбеҙ, - егет ҡәнәғәт көлдө, әйтерһең дә, оло серҙе асҡан күрәҙәсе. Үҙе ярамһаҡланып иптәштәренә ҡараны.

Вәт, сволочь, теге алкаш егет ҡотортоп ебәргән, ысынлап та. Бирмәһә, барыбер талап аласаҡтар. Нишләһен, ҡалған аҡсаһын һонорға мәжбүр булды.

- Бүтән юҡ, бөтә аҡса шул, берәүегеҙгә биргәйнем бит инде. Шул етмәнеме ни?

- Беҙ уны күрмәнек, беҙ үҙебеҙ башҡа, - егет ҡулындағыһын һананы. - Бында күпме?

- Ярты ға етә, - тип яуапланы Әсләм. - Һеҙгә бит эсергә кәрәк.

- Эсергә түгел, баш төҙәтергә, - тип бүлдерҙе бәләкәй кәүҙәле юлбаҫар.

- Барыбер инде.

- Барыбер түгел шул, барыбер булһа бармаҡ менән эшләрҙәр ине, - егет хихылдап көлдө, йәнәһе, осҡор хәбәр әйтте.

- Ике ярты лыҡ аҡса менән юлға сыҡмайҙар. Район үҙәгендәге ашханала итһеҙ кәбеҫтә өйрәһе генә лә шул хаҡ тора, - быныһын таҡыр баш әйтте.

- Тентейемме? - тип әтәсләнде теге бәләкәй, Әсләм яғына ынтылып-ынтылып.

- Ҡырағайланма, бында ике шешәгә етә, ысынлап та, - тип яуапланы таҡыр баш ҡәтғи генә. Намыҫы ҡуҙғалды, ахыры, - булмаған район үҙәгенә китһен әйҙә.

Егеттәр бер-береһенә серле генә һирпелде лә еңеүсе ҡиәфәтендә ашыҡмай ғына китеп барҙы. Әсләм улар артынан байтаҡ ҡарап торҙо, үҙенең меҫкенлегенә, көсһөҙлөгөнә, ҡаршылашмай-нитмәй күҙ асып күҙ йомған арала ике тапҡыр таланыуына йәне көйҙө. Бирмәй ҙә булмай ине шул - туҡмауҙары бик ихтимал ине. Өсәүгә яңғыҙы нисек ҡаршы торһон? Имгәтеп-нитеп ҡуйһалар, судьяларға нисек күренә? Улар бит бер ғәйепһеҙгә юлбаҫарҙарҙан туҡмалған, аҡсаһын алдырған тип түгел, килгәндә ҡайҙалыр, кемдәр менәндер һуғышып йөрөгән, тимәк, үҙе һуғыш суҡмары, тип ҡабул итәсәк. Улай уйлауҙары Әсләмгә һис кәрәкмәй, был уның файҙаһына түгел, һөйләшеүҙәренә ныҡ ҡамасаулаясаҡ - төп эшен асыҡлайһы урынға, быныһына бәйләнеп йонсотасаҡтар. Төшөрөп ҡалдырманыммы, тип Әсләм туҡталыш будкаһынан йолҡоп алған ҡағыҙҙы тотоп ҡараны. Урынында, әммә лыс һыу ине ҡағыҙ, гәзиткә йәки полиэтиленға төрөп һалырға башы етмәгән.

Нишләргә белмәй, берсә урманға, берсә ауыл яғына ҡарап аптырап торған арала талаусы егеттәрҙең туҡтағанын һәм ҡулдарын һелтәй-һелтәй бер-береһе менән бәхәсләшкән, ҡысҡырышҡандарын шәйләне. Тәүҙә, быларға аҡса етмәне, ахыры, йәнә миңә килергә ниәтләнәләр, тип уйлағайны ла, береһе, таҡыр башлыһы, уның яғына ишаралап, нимәлер ҡысҡыра, һөрәнләй башлағас, бәхәстең сәбәбе аҡсала түгеллеген аңланы. Әлеге егет Әсләмгә ҡулы менән, туҡта, китмәй тор, тигән ишара яһаны ла ҡабаланмай ғына уның яғына атланы. Ҡасыуҙан мәғәнә юҡ, бараһы юлын асыҡ ҡына белмәй, аҡсаһы ла ҡалманы, шуға уны тыныс ҡына көтөргә булды.

- Ҡарале, иптәш, һинең унда барыуыңдан мәғәнә юҡ, - тине таҡыр баш Әсләм янына килеп еткәс. Ҡапыл әйтмәне, көттөрөп әйтте, Әсләмгә бераулыҡ һынсыл ҡарап торғандан һуң ғына әйтте. - Кире әйлән лутсы. Үҙеңдең ғәйепһеҙ икәнеңде барыбер иҫбатлай алмаясаҡһың.

Әсләм тәүҙә бер нәмә лә аңламаны, хәбәренең мәғәнәһе аңына барып еткәс, тамам шаңҡыны - бөтөнләй таныш булмаған эскесе егет уның ҡайҙа, ниндәй йомош менән китеп барыуын белә! Баш етмәҫлек хәл, торғаны бер мөғжизә! Был да көтөүсе ҡарт әйткәнде ҡабатлап тора.

- Ҡайҙа барыуҙан?

- Ҡайҙа-ҡайҙа? - егет шырпы һымаҡ ҡапыл тоҡанып китте. - Ниндәй маҡсат менән китеп барыуыңды беләм, бәй.

- Ҡайҙан беләһең? Мин бер кемгә лә һөйләп йөрөгәнем юҡ та.

- Уны бөтәһе лә белә, һинең һөйләп йөрөүең кәрәкмәй ҙә.

- Ҡайҙан белгәндәр һуң?

- Кеше йөрөп ята, телефон бар, башҡаһы.

- Улайһа бөтәһе лә мине ғәйепле тип иҫәпләйме?

- Бер кем дә һине ғәйепләмәй. Киреһенсә. Ул егеттең атаһы районда ҙур түрә, ағаһы баш ҡалала, ә һине яҡларлыҡ бер кемең юҡ, шуға ла үҙеңдең ғәйепһеҙ икәнеңде иҫбатлай алыуың бик икеле. Шәп адвокат тап эшеңде отҡоң килһә. Табаһың да доверенность яҙып бөтә эшеңде уға тапшыраһың да ҡуяһың. Нимә тип үҙең йөрөйһөң? Юрист түгелһең, закондарҙы белмәйһең. Ҡабалан, иптәш, мин һиңә ихлас әйтәм, - һәм егет иптәштәре артынан китте. Бер аҙ барғас боролдо ла һөрәнләне: - Эй, аҡсаңды кеҫәңә һалдым. Ғәфү!

**(Дауамы. Башы 46-сы һанда).**

✓ *Һеҙҙең хаҡта нимә һөйләүҙәренә бөтөнләй иғтибар итмәгеҙ. Кеше барыбер үҙе теләгәнсә уйлай, ә һеҙ үҙегеҙ һәм тормошоғоҙ менән ғорурланығыҙ. Һеҙҙең ниндәй юл үткәнегеҙҙе улар белмәй бит.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ҺИМЕРМӘЙЕК

■ Сеченов университетының Йәмәғәт сәләмәтлеген өйрәнеү үҙәге рәсәйҙәрҙең яртыһында артыҡ ауырлыҡ күҙәтелә, тип белдерә. Тикшеренеүҙәрҙә 2150 кеше ҡатнашҡан, респонденттарҙың уртаса йәше - 45 йәш. 52 процент кешең ауырлығы тейешенән артыҡ, уларҙың 22 процентында һимеҙлек асыҡланған. Бөтөн донъяла был һан - 13 процент. Статистикаға ярашлы, айына килеме 20 мең булған граждандар төркөмөндә артыҡ ауырлыҡтары булғандар 30 процент һәм был категориялағы 30 процент кешелә һимеҙлек күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, халыҡ үҙен физик йәһәттән яраҡлы әүҙем иҫәпләй. 55 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт менән шөғөлләнә, 74 проценты спорт залына һирәгерәк йөрөй. Әммә ниндәйҙер ауырыу менән, мәҫәлән, диабет менән ауырыусылар араһында физик күнекмә яһаусылар 8 процент ҡына. Тап ауырыу кешеләр өсөн физик әүҙемлек күберәк кәрәк, шул саҡта ғына уларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

■ Хроник сирҙәрең булыуына ҡарамаҫтан, йәшәү рәүешенең ҡайһы бер факторҙары "уңышлы" ҡартайырға мөмкинлек бирә, ти ғалимдар. Һынауҙарҙа ҡатнашҡан 8 мең кеше уларҙың һораужарына яуап биргән, белгестәр уларҙың физик мөмкинлектәрен - атлап йөрөй алыуҙарын, ҙурҙарын-үҙҙәре ҡарауҙарын, шулай уҡ психологик һәм эмоциональ торош тарын, сәләмәтлектәрен баһалаған. Кешенең белем кимәле, йәшәү рәүеше, табиптар ҡуйған диагноздары, финанс хәле, енесе лә иҫәпкә алынған. Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда "уңышлыраҡ" ҡартая икән, юғары килемең булыу ҙа бәхетле булырға булышлыҡ ҡына итә. Шулай уҡ икенсе яртың булыуы, ябыҡлыҡ, тәмәке тартмау, шулай уҡ даими физик әүҙемлек өлкән йәштәге тормошонда сәләмәтерәк итә.

■ Ҡышын калориялы итеп туҡланырға кәрәк, ти белгестәр. Йылынам тип, сәйҙе йыш эсеү зыянлы, ул организмдан шыйыҡлыҡты ҡыуа, һөҙөмтәлә һыу-тоҙ балансы менән йылылыҡ әйләнеше боҙола. Кеше һыуыҡты тоймаған да һымаҡ, шуға өшөгәнен аңламай ҙа ҡала. Эҫе сәй эсеп тирләгәндән һуң да һалҡын тейҙереү ҡурҡынысы арта. Шулай уҡ алкоголь ҡәтғи тыйыла. Сәй урынына борос, башҡа тәмләткестәр һалып эшләнгән эсемлектәр ҡулланырға була. Иртәнге ашҡа аҡ май һалынған бутҡа, авокадо, сыр менән икмәк киҫәге яҡшы. Шулай ҙа артыҡ майлы ашарға кәрәкмәй. Ауыр ризыҡ ашҡаҙанға өҫтәмә ауырлыҡ тыуҙыра, шуға ла әҙ-әҙләп, йыш ашарға тырышығыҙ.

■ 40 йәштән йәшерәктәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре артыуының төп сәбәбе - тәмәке тартыу. Хатта үҙе тартмайынса, йыш ҡына тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булыусылар ҙа атеросклероздан зыян күрә. Шул уҡ ваҡытта, был насар ғәҙәттән баш тартыу инфаркт һәм инсульт хәүефен 30 процентҡа түбәнәйтә. Икенсе сәбәп - төрлө мәғлүмәттән һаҡлана белмәү. Уларҙың гел ыңғай булмауы бар, беҙ үҙебеҙ, яҡындарыбыҙ, сериалдар геройҙары, ил, планетаның киләсәге һ.б өсөн гел борсолоп йәшәйбеҙ. Былар иһә яйлап хроник стресҡа килтерә. Тәүтормош кешеләре стресты хәүеф менән көрәшеүҙә ҡулланған, адреналин ҡырағай йәнлектәрҙән ҡасып ҡотолорға, дошмандарҙы еңергә ярҙам иткән. Бөгөн адреналин тышҡа сыҡмай, ә үҙенең тәьҫирен организмға, эскә йүнәлтә - ҡан баҫымын күтәрә, атеросклероз хәүефен арттыра.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БАЛАҪТАРҘА - БЫУАТТАР ТАРИХЫ

**Ул көндө Баймаҡ халыҡ ижады үҙәге йорто бал ҡортондай геүләп торҙо. Бында райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының балаҫ һуғыу оҫталары бәйге тотто. Абруйлы баһалама ағзалары ошо онотолоп ҡуя яҙған милли кәсепте тергеҙгән, уны артабан да үҫтереү өсөн күп көс һалған 29 конкурсант ағинәйҙең эштәренә баһа бирҙе.**

Баймаҡ районының бик күп ауылдарынан йыйылған ағинәйҙәр йыйынында район хакимиәте башлығы Фәнис Әминев, уның беренсе урынбаҫары Фәнил Нәҙерғолов, Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Янбаева ҡатнашты.

- Район хакимиәте исеменән районың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларына милләттең рухын күтәреүгә, ҡурсалауға, халҡыбыҙҙың йолаларын, кәсептәрен тергеҙеү, үҫтереү, улар нигеҙендә киләсәк быуында илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү буйынса алып барған ҙур эштәре өсөн рәхмәт белдерәм, - тине Фәнис Әминев. - Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ысын асылын, боронғо ағинәйҙәрҙең аҡыл һәм рух ҡеүәтен үҙҙәренә мираҫ итеп алған ойошма ағзалары ихтирамға лайыҡ эштәр башҡара. Күп йылдар төрлө ойошмала эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар ағинәйҙәр хәрәкәтенә ҡушылып, тормошобоҙҙо йәмләүгә, йәнләндереүгә, ауылдарыбыҙға ҡот ҡайтарыуға үҙ өлөшөн индерә, уларҙың ауыл хакимиәте башлыҡтары, мәҙәни усаҡтар, белем биреү учреждениелары менән бергә һәр сараны үҙҙәренә генә хас мәғәнә һалып, халыҡсанлыҡҡа, милли колоритҡа баҫым яһап уҙғарыуҙарын күҙәтеп, шатланабыҙ. Район ағинәйҙәренең махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеүгә беренселәрҙән булып күтәрелеп сығыуы, энтузиазмы һоҡландыра. Киләсәктә лә шулай бергә һәм берҙәм булайыҡ, - тине район башлығы һәм Фәнис Ғәбдрәшит улы бер төркөм ағинәйҙәргә район Советының һәм хакимиәтенең Рәхмәт хаттарын тапшырҙы.

- Район ағинәйҙәре бөгөн йәмәғәт эштәрендә шул тиклем әүҙем ҡатнаша, - тине Баймаҡ районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гүзәл Монасипова. - Улар бар эштәргә лә кемдәндер ҡушыуы буйынса түгел, ә үҙҙәренең йөрәге, намыҫы ҡушыуы буйынса, милләтте, тыуған еребеҙҙе, республикабыҙҙы артабан йәшәтеү маҡсаты менән тотона. Сабыйҙар тыуа икән - уны ҡаршы алыу, бала мәктәпкә бара икән - уны белем юлына оҙатыу, йәштәр өйләнә икән - уларға ырыҫлы, бәхетле тормош теләү йолаларын атҡаралар. Йолаларға ғына түгел, милли кәсептәребеҙгә яңы һулыш биреүгә лә дәррәү ҡушылды бит улар. Бөгөн иһә күп көс, күп тырышлыҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға гуманитар ярҙам күрһәтеү саралары-на йүнәлдерелә. Ойоҡбаш, бирсәткәләр бәйләнә, һалма, ҡорот, ҡаҙы кеүек танһыҡ ризыҡтар әҙерләнә... Районда ошо юҫыҡта үткәрелгән бар сараларҙың уртаһында - ағинәйҙәр. Рәхмәт уларға!

- Ағинәйҙәр - улар әсәйҙәр, ҡартәсәй, өләсәйҙәр, - тине Ярат ауылынан мәғариф ветераны, Мөхтәр Монасипов аҡһаҡал һүҙе менән сығыш яһап.- "Һәм балаһын яуға оҙатҡанда, бер уҡ төрлө илай әсәйҙәр", тигән йыр һүҙҙәре бар. Ватаныбыҙҙың именлеге, киләсәге өсөн барған махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан башҡорт яугирҙары араһында һеҙҙең дә улдарығыҙ, ейәндәрегеҙ бар. Оло йәштә булыуға ҡарамаҫтан, һеҙ уларға ла ярҙам итергә тырышаһығыҙ. Иҫән-имен ҡайтһын балаларыбыҙ,





КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ДӨРӨҪ ЙӘШӘҮ КӘРӘК

**Өлкән йәштәгеләр өсөн был кәңәштәр. Улар ябай ғына, әммә уйландыра, ысынлап та үҙенде үҙгәртергә, икенсе бер тулҡынға көйләргә ярҙам итә:**

- балағыҙ һәм ейәндәрегеҙҙең финанс хәле һеҙҙе борсомаһын. Аҡсағыҙҙы үҙегеҙгә тотоноуҙан ояламағыҙ. Балағыҙҙы аяҡҡа баҫтырыуға һеҙ күп йылдарығыҙҙы бағышланығыҙ. Хәҙер улар үҙҙәре тураһында үҙҙәре уйларға тейеш;

- арырға тырышмағыҙ, үҙегеҙҙе формала тотоғоҙ, һаулығығыҙҙы нығытыу тураһында күберәк уҡығыҙ;

- ваҡ мәшәҡәттәргә борсолмағыҙ, яҡшы мәлдәрҙе, йылы хәтирәләрҙе иҫкә алырға тырышығыҙ. Йәшәргә ҡамасаулаған үкенестәргә бирелмәгеҙ, бөгөнгө менән йәшәгеҙ;

- тормошто яратығыҙ;

- үҙегеҙ менән ғорурланығыҙ. Парикмахерға, косметологҡа, стоматологҡа йөрөгөҙ. Яратҡан хушбуйығыҙҙы һатып алығыҙ. Үҙегеҙҙе ҡарап йөрөһәгеҙ, үҙегеҙгә ышаныс артыр, көс килеүен тойорһоғоҙ;

- эргә-тирәләге ваҡиғалар тураһында хәбәрҙәр булығыҙ, уҡығыҙ, таныш-белеү тапшырыуҙарын ҡарағыҙ;

- элекке таныштарығыҙ менән аралашып тороғоҙ. Һеҙҙең йәштә был бик мөһим. Күңелле ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрөгөҙ;

- ҡайһы бер кешеләр ологайғас йомшара, икенселәре, киреһенсә, ҡаты күңеллегә әйләнә. Һуңғылары менән аралашмағыҙ, тормошто һәм кешеләрҙе яратҡандар менән генә үҙегеҙҙе уратып алығыҙ;

- балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ менән йәшәргә тырышмағыҙ. Яҡындар менән бергә булыу яҡшы, әммә һәр кемдең үҙенең шәхси арауығы булырға тейеш;

- яратҡан шөғөлөгөҙҙән баш тартмағыҙ;

- күберәк көлөгөҙ. Ҡасандыр һеҙгә уныш йылмайғанына, ошо йәшкә етеүегеҙгә ҡыуанығыҙ. Һәр ваҡиғаның ыңғай яғын табығыҙ;

- һеҙҙең хаҡта нимә һөйләүҙәренә бөтөнләй иғтибар итмәгеҙ. Кеше барыбер үҙе теләгәнсә уйлай, ә һеҙ үҙегеҙ һәм тормошоғоҙ менән ғорурланығыҙ. Һеҙҙең ниндәй юл үткәнегеҙҙе улар белмәй бит.

Һәр көндән, мәлдән, миҙгелдән ҡәҙерен, йәмен белеп йәшәгеҙ!

*✓ Улар беренселәрҙән булып башҡорт ҡатын-ҡыҙының баш кейеме - һарауысты, таҫтарҙы тергеҙҙе, үҙҙәренең өләсәйҙәре ҡулы менән ижад ителгән буй балаҫ-торпоша һуғыу кәсебен яңыртты.*

донъялар тыныс булһын, тигән доғафатихаларығыҙға ҡушып, күңел йылыһын да оҙатаһығыҙ. Хоҙай сабырлыҡ бирһен барсабыҙға...

Уйландырырлыҡ һүҙҙәр әйтте аҡһаҡал. Таулыҡай ауыл биләмәһе башлығы Ҡәйүм Уразбаевтың, ирҙәр һүҙенең, ағинәйҙәр эшенә матур баһа биреп сығыш яһауы ла мәртәбәле булды һәм залдағыларҙың күңелен үҫтерҙе.

Шундай рух күтәренкелеге өҫтәгән байрам һәр кемдә бары тик изгелек тойғолары ҡалдырҙы. Район етәкселәре лә балаҫ һуғыусыларҙың күргәҙмәһе менән танышып, оҫтабикәләр менән аралашып, уларҙың кәсепселек эштәре менән һоҡланыуын белдерҙе. Уларҙың әленән-әле: "Был балаҫтарҙы ысынлап та һеҙ һуҡтығыҙмы? Беҙҙең төбәктә бындай оҫталар бармы ни?"- тип ҡабатлауы, әлбиттә, ошо үҙаллы, бер ниндәй ярҙамһыҙ, үҙ белдеге, үҙ сығымдары менән кәсепселеккә тотоноусыларҙы хуплау тип тә ҡабул ителде. Күргәҙмәләге XIX быуатта һуғылған шәлдәр, балаҫтар өлгөһө менән танышыу бигерәк тә тулҡынландырғыс булды. Быуындан-быуынға тапшырылып килгән ҡәҙерле әйберҙәр беҙҙе шул дәүергә алып ҡайтты. Тиҫтә йылдар уҙһа ла уларҙың төҫөн юғалтмай, шул килеш һаҡланыуы үҙе бер мөғжизә ине. Конкурсҡа ҡуйылған балаҫтар тап ана шул төп нөсхәләге эштәр өлгөһөндә һуғылған да инде. Тағы ла шуны билдәләп китергә кәрәк, конкурста балалар ҙа ҡатнашты. Өләсәйҙәренән, әсәйҙәренән күреп, уларҙың да был эшкә өйрәнеүе тик маҡтауға лайыҡ.

Баһалама ағзаларына оҫтабикәләрҙең иң-индәрен билдәләү бик ауырға тура килде. Ә шулай ҙа бер тауыштан Гран-призы Таулыҡай ауылы ағинәйе Мәзүнә Күсәрбаеваға бирергә ҡарар ителде. Беренсе урынға - Темәс ауылынан Мөнирә Яхина, икенсе урынға - Темәстән Эльза Ғөбәйҙуллина менән Иҫке Сибай ауылынан Ҡарасәс һәм Юлай Баязитовтар, өсөнсө урынға Һәмән ауылынан Әлфиә Һибәтуллина, Күгиҙелдән Дамира Сәғитова һәм Йомаш ауылынан Сәриә Аҡбулатова лайыҡ булды. Конкурста ҡатнашҡан башҡа оҫталарҙың эше төрлө номинацияларҙа билдәләнде. Сыңғыҙҙан Дәүләтбикә Ғәликәева, Мәрйәм Мәхмүтова, Ишһылыу Рәжәпова, Әлфиә Сирбаева, Рәйлә Әбдрәшитова, Таһир ауылынан Мәликә Биктимерова, Ғәшүрә Рәүилова, Темәстән Заһира Яманғолова, Фәүзиә Әбсәләмова, Билалдан Фатима Ғайсина, Өмөтбайҙан Миңлегөл Ҡужахмәтова, Ғүмәрҙән Флүрә Ноғоманова, Алғаҙынан Ғәбиҙә Ҡунысбаева, Беренсе Төркмәндән Нәзимә Ғөбәйҙуллина, Гөлсирә Рахманғолова, Ишбирҙенән Ләлә Иҙелбаева, Түбәнән Миңзифа Мәжитова, Римма Ғибәҙәтова, Үрге Йәйыҡбайҙан Сәғирә Рахманғолова, Татлыбайҙан Фирүзә Йосопова, Иҫке Сибайҙың "Шәфәҡ" ағинәйҙәр ойошмаһы береһенән-береһе зауыҡ менән һуғылған балаҫтарҙан, ҡомартҡыларҙан торған бай күргәҙмә тәҡдим итте.

**Лилиә ТАҠАЕВА.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ошо көндәрҙә Йылайыр районы ағинәйҙәре кейеҙ баҫыусылар конкурсы үткәрҙе. Ғөмүмән, Миләүшә Моратова етәкселегендәге Йылайыр "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары милли кәсептәрҙе тергеҙеү буйынса бик әүҙем эшләй. Улар беренселәрҙән булып башҡорт ҡатын-ҡыҙының баш кейеме - һарауысты, таҫтарҙы тергеҙҙе, үҙҙәренең өләсәйҙәре ҡулы менән ижад ителгән буй балаҫ-торпоша һуғыу кәсебен яңыртты, шулай уҡ станокта дебет шәл һуғыу менән шөғөлләнеүселәр ҙә барлыҡҡа килде. Бына әле кейеҙ баҫыуға ихлас тотоноп, уны ижади кимәлгә күтәрергә ең һыҙғанып торалар. Афариндар!**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Үҙ һүҙле стоматолог

Бер ваҡыт бер стоматолог-ортодонт балаларҙың аңҡауына бәйле проблемаларҙы хәл итеү ысулын уйлап тапҡан. Асышына барлыҡ аҡсаһын һалған. Һынау өлгөһө әҙер булғас, адвокаты уға тиҙерәк патент алырға кәңәш биргән. Стоматолог тағы ла бар капиталын йыйнап, ғариза яҙған һәм өс йыл патент алыуҙы көткән, хыялында ғына уны яңы идеяларҙы көтөп кенә йөрөгән бай япон инвесторына һатыуын уйлаған. Әммә ул көткән арала икенсе бер компания тап уныҡына оҡшаш аппаратты һатыуға сығарған. Улар тиҙ арала ҙур ғына сумма аҡса эшләгән, ә бар көсөн, ваҡытын һәм аҡсаһын уйлап тапҡан аппаратын һаҡлауға һалған стоматолог бер тинһеҙ тороп ҡалған. Артыҡ һаҡланырға кәрәк инеме икән? Минеңсә, уға тиҙерәк донъя баҙарына сығып, кемдер яңы нимәлер уйлап тапҡанға тиклем идеяһын һатып ҡалырға кәрәк булған. Беҙҙең заманда технологиялар ҙур тиҙлек менән үҫә, патентты өс йыл көткән ваҡытта ул инде береһенә лә кәрәкмәҫкә мөмкин.

Стоматологтың адвокаты был компанияны судҡа бирергә тәҡдим иткән, әммә ул бер нәмәне иҫәпкә алмаған: уның яҡланыусыһы ҡырып-һепереп уға түләргә аҡса йыйнағанда, теге компания йөҙәр миллион доллар аҡса эшләп ҡалған инде. Шуға ла мин контракттар донъяһында артыҡ һаҡланыуға ҡарағанда ныҡлы ҡул бирешеп килешеү көсөнә ныҡлы ышанам.

## Тәҡдир ғәҙеллеге

Донъяла ғәҙелһеҙлек хөкөм һөрә тип уйламайым. Күҙәтеүҙәрем буйынса, Тәҡдир һәр саҡ ғәҙел. Һәр кем һорағанын ала. Һеҙ һәр көн нимә һорайһығыҙ - шул тормош менән йәшәйһегеҙ. Ньютондың өсөнсө - ғәмәл һәм ғәмәлһеҙлек тигеҙлеге һәр ҡылығығыҙ кире әйләнеп ҡайтыуын раҫлай. Кеше ғәҙеллеге сикле, Тәҡдир ғәҙеллегенең сиге юҡ. "Ни сәсһәң - шуны урырһың", тиеү менән килешәһегеҙ икән, Тәҡдир ғәҙеллегенә лә ышанырға бурыслыһығыҙ.

Һеҙгә контракттар йәки патенттар ҙа, нимәгә лайыҡһығыҙ - шуны алыуығыҙҙы баһалауығыҙ ҙа кәрәкмәй. Тәҡдиргә ышанысығыҙҙы нығытығыҙ. Тәҡдир - иң яҡшы банкир, иң яҡшы бухгалтер, иң яҡшы адвокат. Иң юғары ғәҙеллек ниндәйҙер аныҡ ғәмәл менән хәрәкәткә килтерелгән барлыҡ ваҡиғаларҙы иҫәпкә ала. Ғәҙеллек сарыф ителгән эш сәғәттәренә лә, түккән көс күләменә лә бәйле түгел: ул бары тик һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ һөҙөмтәһенә бәйле.

Әгәр һеҙ бер һүҙ менән кешене ерҙә йәшәүселәрҙе күберәк аҙыҡ һәм энергия менән тәьмин итә алған яңы технология уйлап табыуға дәртләндерә алаһығыҙ икән, бер һүҙегеҙ миллионлаған доллар торасаҡ.

Шулай уҡ киреһе лә хаҡ: әгәр һүҙегеҙ кемгәлер зыян килтерә, ауыр хәл-торошҡа ҡуя, башҡа меңәрләгән кешенең тормошон яҡшыртырға ҡамасаулай икән, был кире ғәмәл дә һеҙҙең иҫәбегеҙгә яҙыла бара.

**Пьер МОРАНСИ.**

ЫШАНҺАҢ - ЫШАН

# ДЕКАБРЬ АЙЫНА ҺЫНАМЫШТАР



**4 декабрь -** күктә болоттар күп булһа, бер аҙҙан һыуытасаҡ. Буран йылы һәм ҡарһыҙ ҡыш башланыуы тураһында һөйләй.

**5 декабрь** көнө бик ныҡ һалҡын булһа, тимәк, оҙаҡламай бурандар башланыр.

**6 декабрь** көнө ҡар төшһә, һыуыҡтар булыр. Әгәр был көндә епшек икән, Яңы йылға тиклем ҡыш көтмәгеҙ.

**7 декабрь** күктә йондоҙҙар балҡып торһа, һауа торошо кинәт үҙгәрер. Әгәр был көндә йондоҙҙар атылһа, ҡышын ҡар аҙ яуа, ә мартта көслө һыуыҡтар килер.

**8 декабрь** көнө мөрйәнән сыҡҡан төтөнгә иғтибар итәләр. Әгәр ул өҫкә күтәрелһә, тиҙҙән ҡар яуыр. Таралып китһә, елле булыр.

**9 декабрь -** әгәр был көнө болоттар ергә һалынып торһа, бер аҙҙан һыуыҡтар етер.

**10 декабрь** көнө эт һәм бесәйҙәр үҙҙәрен ғәҙәттәгенән тынысыраҡ тотһа, ҡаты һыуыҡ һәм ыжғыр буран көтөгеҙ.

**11 декабрь** көнө бесәй тырнанһа, һыуыта. Эт өрөп, шыңшый икән, бик көслө һыуыҡтар киләсәк.

**12 декабрь** көнө әҙерәк болотлап торһа, һыуыта. Көн томанлы икән, тиҙҙән көслө ел һәм буран булыр.

**13 декабрь** көнө ҡар яуһа, ул ерҙә 110 көн ятыр.

**14 декабрь -** ҡаурый-ҡаурый ҡатламлы болоттар һыуыҡтар тураһында киҫәтә.

**15 декабрь** көнө ямғыр яуһа, ул 40 көн буйына дауам итә.

**16 декабрь** көнө балыҡсылар яҡшы табыш менән ҡайтһа, ҡыш йылы килер.

**17 декабрь** көнө ағас ботаҡтарында ҡар ята икән, ҡыш һалҡын килер.

**18 декабргә** тиклем бер тапҡыр ҙа һыуыҡтар булмаған икән, тимәк, тиҙ арала епшек ҡар бураны булыр.

**19 декабрь -** бесәйҙәр ауыҙ-моронон тәпәйе менән ҡаплап йоҡлаһа, тиҙ арала көслө һыуыҡтар килер.

**20 декабрь -** бесәйҙәр һыу эсһә, көслө яуым-төшөм булыр.

**21 декабрь** ҡояш ғәҙәттәгенән иртәрәк сыҡһа, ҡар яуа.

**22 декабрҙә** көн аяҙ булып, ҡар яуһа - йылы ҡышҡа ишара.

**23 декабрҙәге** буран - көслө һыуыҡтар билдәһе.

**24 декабрь -** ҡоштар түбән осһа, ел көсәйер. Көньяҡтан иҫкән ел көндөң йылыныуы тураһында һөйләй.

**25 декабрь -** киләһе йылдың уңышлы килеү-килмәүен белеү өсөн был көндө сейә ботағы киҫеп, уны ер һалынған сүлмәккә ултыртҡандар. Ул Раштыуаға япраҡ ярһа, йыл уңышлы килә тип һаналған.

**26 декабрҙән** башлап 12 көн һыуыҡ була икән, ҡыш сатнама һалҡын килер.

**27 декабрь -** төндә ағастарға бәҫ һырыһа, ҡыш һыуыҡ килә. Иртәнге сатнама һыуыҡ тиҙ арала көслө ел һәм ҡар бураны буласағын иҫкәртә.

**28 декабрь** көнө йылы була икән, тимәк, көслө һыуыҡтар ҡыш аҙағында ғына киләсәк.

**29 декабрҙәге** һалҡын әсе ел Раштыуа һалҡындарының дауамлы булыуы хаҡында иҫкәртә. Болотло, елле көн - кинәт йылытыуға.

**30 декабрҙә** ҡар яуһа, Яңы йыл төнө һалҡын булыр.

**31 декабрь** көнө иларға һәм күңелһеҙләнергә ярамай, юғиһә йыл буйы шундай кәйеф оҙата барасаҡ.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 14 ДЕКАБРЬ - БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ

**Был байрам башҡорт телен һаҡлау, яҡлау һәм үҫтереү маҡсатында үткәрелә. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Р. Ф. Хәбировтың указына ярашлы, 2019 йылдан алып 14 декабрь Башҡорт теле көнө тип билдәләнә.**



Был дата осраҡлы һайланмаған. Тап ошо көндә күренекле башҡорт шағиры, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулла тыуған. 2015 йылдан башлап, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ярҙамында Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы һәм Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы башланғысы менән билдәләнә, рәсми рәүештә 2019 йылдан үткәрелә. Был көндә Башҡортостанда һәм башҡорттар йәшәгән башҡа төбәктәрҙә төрлө саралар: онлайн һәм офлайн форматтарҙа башҡорт телен һәм башҡорт халҡының мәҙәни ҡиммәттәрен һаҡлауға йүнәлтелгән интернет-флешмоб, викториналар, лекциялар, асыҡ дәрестәр үткәрелә, йылға йомғаҡ яһала, бынан алда уҙғарылған конкурстарҙың еңеүселәре бүләкләнә, киләһе йылға гранттар иғлан ителә. Сарала республиканың барлыҡ мәҙәниәт һәм белем биреү учреждениелары ҡатнаша.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**47-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Гәзит. Ямантау. Мәсем. Ҡанат. Юрған. Ауылдаш. Торатау. Ареал. Ирәмәл. Ырыу. Ант. Баҙар. Ләлә. Аҡыл. Ләпәк. Ҡыуаҡ. Кеше. Алиһә. Шаҡша. Шарлама. Ирәкташ.

**Вертикаль буйынса:** Тумыртҡа. Ҡырҡтытау. Тал. Баҡа. Ярма. Лакшми. Тауис. Грамм. Аллаһ. Әүәләк. Сәләмәтлек. Ете. Тыуым. Юша. Бәлеш. Роза. Алма. Нил. Рикша.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 декабрь "Ете быуын. Һаҡлаусылар"** спектакль-вербатим. 16+

**14 декабрь "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+

**15 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 16+

**16 декабрь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 11.00, 13.00 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14-15 декабрь "Премьера! "Мин башҡорт телен өйрәнәм"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 11.00 0+

**16 декабрь Премьера! "Дейеүкәй"** (С. Лебо). 18.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 декабрь "Йәнем моңо минең - башҡорт теле"** концерт. 6+

**15 декабрь "Lounge-концерт. Фимбо".** 6+

**"Звезды Биг-бенда"** концерт. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**11 декабрь "1+1=математика судьбы"** (Б. Ҡаһарманова). 13.00, 15.00 12+

**12 декабрь "Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия. 12+

**13 декабрь "Правда за нами..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.00, 15.00 6+

**14 декабрь "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникаһы. 14+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 декабрь Премьера! "Урман оркестры"** (Г. Юнысова). 14.00 0+

**"Шағир күңеле мөғжизә"** БР-ҙың халыҡ шағиры **Гөлфиә Юнысова** менән осрашыу. 15.00 0+

**16 декабрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

**17 декабрь Премьера! "Как Петух спасал мир"** (З. Сөләймәнов), Яңы йыл әкиәте. 12.00 0+

**"Хушығыҙ, хыялдарым"** (Ә. Атнабаев), драма. 18.00 12+

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АҠСА ЯҢЫРТЫЛА




**Башҡортостанда биш һумлыҡ яңы купюралар әйләнешкә керҙе. Улар 1998 йылғы өлгөләге банкноталарҙан айырылмай, әммә хеҙмәт итеү ваҡыты оҙаҡҡа иҫәпләнгән.**

Хәҙер купюралар һаҡлағыс лак менән ҡаплана, был хеҙмәт итеү ваҡытын 30 процентҡа арттыра. Рәсәй банкы уларҙы 2022 йылда яңынан сығара башланы. "Биш һумлыҡ купюралар әйләнештән алынманы, бары тик бер нисә йыл баҫылманы һәм шуға һирәк осрай ине. Уларға ике меңенсе йылдар башында ихтыяж булды, ләкин купюралар тиҙ туҙҙы. Һөҙөмтәлә Рәсәй банкыһы уларҙы тимер аҡсаға алмаштырҙы. Хәҙер иһә тимер аҡса һуғыуға ҡарағанда ҡағыҙ купюра отошлораҡ", - тип аңлатты Рәсәй банкының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе - Милли банк идарасыһы урынбаҫары Егор Михтанюк. Шул уҡ ваҡытта биш һумлыҡ тимер аҡсаларҙы банкноталар менән алмаштырыу хаҡында һүҙ бармай - икеһе лә берҙәй әйләнештә йөрөйәсәк.

*ШУНДАЙ ХӘБӘРҘӘР*

# ТАМАШАҺЫ УЙЛАНЫҺЫН ИНЕ



**Өшо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры тамашасыларына яңы спектакль тәҡдим итте. Сюзанн Лебо пьесаһы буйынса "Дейеүкәй" спектаклен БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Айрат Абушахманов сәхнәгә сығарҙы.**

Спектакль тормошта үҙ урыныңды табыу тураһында бәйән итә. Урманда әсәһе менән генә йәшәгән Симон исемле дейеү балаһы мәктәпкә барғас, башҡа балаларҙан айырылып тороуын аңлай: оҙонораҡ буйлы, ит ашамай, "атай" тигән һүҙҙе белмәй, ҡыҙыл төҫтө тәүгә күрә. Ә бер көндө мәктәптән ҡайтып, әсәһенә юлда осраған ҡуянды ботарлап ташлауы тураһында һөйләй. Нишләп улай эшләүе тураһында аңлатып ҡына ниҙер әйтә лә алмай.

- Был ябай, еңел генә әкиәт түгел. Ә ғаилә менән ҡарау өсөн ҡатмарлы драматик тарих. Бында балалар тәрбиәһе, ғаиләлә әсәй һәм атай роле кеүек мөһим темалар күтәрелә, - ти режиссер Айрат Абушахманов. - Беҙ тыумыштан балаға ниндәй сифаттар һалына, шәхес нисек формалаша, ата-әсәләр балалар менән үҙен нисек тоторға тейеш тигән һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ. Кеше ҡайһы юлдан барыуҙы үҙе һайлай, сөнки беҙгә ике башланғыс та һалынған. Яуыҙлыҡ өҫтөнлөк итмәһен өсөн ни эшләргә? Яҡшылыҡ һәм миһырбанлыҡты нисек үҫтерергә?

Спектакль буйынса ҡуйыусы рәссам Сулпан Азаматова, хореограф Рената Крицкая, композитор, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Шәүрә Сәғитова, яҡтылыҡ буйынса рәссам Таһир Аҡманов эшләгән. Пьесаны рус теленә Елизавета Ефимова тәржемә иткән, ә башҡортсаға - Динара Ҡәйүмова. Төп ролдәрҙә БР-ҙың халыҡ артистары Рушанна Бабич, Гөлшат Ғайсина, шулай уҡ Вадим Ҡылысов һәм Салауат Юлдашбаев. Премьера йәш артист Венера Нафиҡова өсөн дебют спектакле булды. Спектакль "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Кесе Ватан мәҙәниәте" федераль проекттары сиктәрендә ҡуйылды. "Минең өсөн был спектаклдә төп тема - ул әсә һөйөүе. Һөйөүебеҙ менән балаларҙы көслөрәк итәбеҙме, әллә ҡайһылыр осраҡта киреһенсәме? Балаларҙы артыҡ ҡурсаларға кәрәкме беҙгә? Әсәй булараҡ, минең өсөн был бик мөһим һорауҙар. Театр әҙер яуап бирмәй. Беҙҙең өсөн тамашасыларҙың спектаклде ҡарағандан һуң уйланыуы мөһим", - ти Рушанна Бабич.

# ҠУРАЙСЫЛАР БӘЙГЕҺЕ

**Белорет районында Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Мөхәмәт Түлебаев призына "Ҡурай сере" асыҡ ҡурайсылар конкурсы уҙҙы. Проект һәләтле ҡурайсыларҙы асыҡлауға, коллективтар ойоштороуға, башҡарыу традицияларын һаҡлауға һәм артабан үҫтереүгә, үҫеп килгән быуынды башҡорт халыҡ музыка ҡоралына йәлеп итеүгә йүнәлтелгән.**

Халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конкурста үҙешмәкәр ҡурайсылар һәм дөйөм белем биреү мәктәптәренең, балалар сәнғәт мәктәптәренең, мәҙәни-ял итеү учреждениеларының һәм башҡа ойошмаларҙың ҡурайсылар ансамблдәре сығыш яһаны. Беренсе конкурс республиканың төрлө төбәктәренән: Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Учалы районарынан, Белорет, Сибай, Туймазы, Учалы ҡалаларынан ҡурайсыларҙы йыйҙы, Силәбе өлкәһенең Арғаяш районынан да ҡатнашыусылар килде. Йәмғеһе 137 кеше, улар араһында 59 солист һәм 9 ансамбль бар ине.

Гран-приға Учалы районынан Шәфҡәт Йосопов лайыҡ булды. Мөхәмәт Түлебаевтың махсус бүләгенә Силәбе өлкәһенән Илһам Йәғәфәров эйә булды. Барлыҡ еңеүселәргә Республика халыҡ ижады үҙәгенән һәм Башҡортостандың Ҡурайсылар союзынан махсус бүләктәр тапшырылды. Ҡурай һәү оҫталары - Учалынан Дим Мәжәүиров һәм Күгәрсендән Урал Хәснуллин конкурс лауреаттары өсөн махсус бүләктәр әҙерләгәйне.

Мөхәмәт Түлебаев - Тамъян ырыуы ҡурайсыларының башҡарыу традицияларын дауам итеүсе. Уның репертуарында 70-тән ашыу башҡорт халыҡ йырҙарының һәм көйҙәренең инструменталь варианттары бар. Ул СССР, БДБ илдәре буйлап гастролдәрҙә йөрөгән, шулай уҡ Ватиканда, Германияла, Италияла һәм Францияла ла булған. Ҡурайсыларҙың дүрт республика конкурсында дүрт Гран-при яулаған. 2006 йылда Рәсәй Федерацияһы Президентының "Иң яҡшы йыл уҡытыусыһы" грантын алған. "БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" һәм "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре".

# "БИШБАРМАҠ"ТАР СЫҒЫШЫ

**Өфөлә "Бишбармаҡ" оркестрының ҙур концерты үтте. Республикабыҙҙа ошондай берҙән-бер коллектив бер нисә йыл элек башҡорт эстрадаһына килеп инде лә тиҙ арала популярлыҡ яуланы.**

Оркестрҙа башҡорт халҡының, симфоник оркестрҙың, заманса эстрада төркөмдәренең уйын ҡоралдары ла бар. "Бишбармаҡ" репертуарында классик йырҙарҙан башлап заманса көйҙәргә тиклем төрлө жанрҙағы 40-тан ашыу йыр һәм композиция иҫәпләнә, ҡайһы берҙәре хитҡа әүерелде ("Алға", "Башҡортостандың баш ҡалаһы", "Йәй йыры"). "Бишбармаҡ" оркестры "Евразия йөрәге" халыҡ-ара сәнғәт фестивале, Башҡорт теле көнө, Виктор Цойҙың иҫтәлегенә арналған концерт кеүек ҙур сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Музыканттар Башҡортостан исеменән башҡа төбәктәрҙә һәм илдәрҙә лә сығыш яһай.

Бөгөн ижади коллективта тубист, композитор, продюсер Вәсил Ғафаров, виртуоз ҡурайсы Морат Йәнәҙаҡов, бас-гитарасы һәм йырсы Марсель Әмәкәсов, соло-гитарасы, композитор һәм аранжировкалаусы Олег Трегубов, барабансы Эмиль Рамеев, солист Заһир Ласынов, һорнайсы Ильяс Әлбәков, саксофонсы Арыҫлан Оморҙаҡов, Салауат Хәлилов (баянсы, клавишалар, вокал) һәм Айрат Кирәев (тауыш режиссеры) иҫәпләнә. Оркестрҙың гүзәл заттарҙан торған "Алтын квартет" ҡыллы инструменттар ансамбле лә бар.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# ТУЙРАЛЫҠҠА БАРҘЫҠ

**Бер мәҡәләлә "туйра" тигән һүҙ осраны. Ҡул аҫтында аңлатмалы һүҙлек юҡ, ярай әле интернетҡа инеү мөмкинлеге иҫкә төштө. Яндекс-тәржемәсе был һүҙҙе башҡортсанан русаға "дубовый" тип кенә тәржемәләне лә ҡуйҙы. Асыҡланыуынса, һүҙҙең нескәлектәре юҡ түгел икән.**

**Туйра.** Туйралыҡ. "Туйра" тип йәш имәнде атайҙар. Йорт янында туйра япраҡ ярҙы. Туйра тәпән беше була. Ә "туйралыҡ" тип йәш имән урманы йөрөтәлә. Тау артында туйралык йәшенгән. Туйралыҡҡа барҙыҡ.

**Төшләк.** Был һүҙҙең бер мәғәнәһе - төш ваҡыты - киң билдәле. Ә икенсе мәғәнәһе - "коньяк". Төшләктән иҫкән ел. Юл төшләккә табан борола.

**Туп.** "Тыныс" тигән һүҙҙе алыштыра алған һүҙ. Туп кеше. Ҡорға йыйылған халыҡ бик туп мөғәмәлә итә.

**Түрегеү.** "Үҙендә ҡунаҡта тота белеү; ҡунаҡта тоторға өйрәнеү" тип аңлата китап "түрегеү" тигән һүҙҙе. Түрекмәгән түрен бирмәгән. Түрегеү - матур сифат.

**Түркен.** Түркенләү. Кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ өсөн атай йорто түркен була. Йәш килен түркенен һағына. Түркене аусыл осонда ғына. Йәш килендең ата-әсә йортона ҡунаҡҡа барыуын "түркенләү" тиҙәр. Туғандары апайҙарының оҙағыраҡ түркенләүен теләй. Ә ул ялында ғына түркенләй алды.

Туған телебеҙҙең һәр һүҙе телмәребеҙҙә үҙен түркендәгеләй иркен тойһон.

**Фәймә МӘЖИТОВА әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕРӘҮ - АЛЛА ҠОЛО...

## бирәү - бәндә ҡоло

Тауҙай талабың менән бергә ҡубәләй эшең күренһен.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөйөк кеше уларҙың бөйөклөгөн аңлап, бөйөк эштәр өсөн көрәшә, ә ахмаҡ уларҙың ниндәй дәрәжәлә ауыр икәнен аңламай көрәшкә тотона.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Асыҡ күңелле кешенең йөҙө лә асыҡ.

**(Фридрих Шиллер).**

Бәхәскә тотонор алдынан уның ахыры дошманлыҡ менән түгел, ә дуҫлыҡ менән тамамланыуына иҫәп тот.

**(Диодор Сицилийский).**

Ысын бәхет - үҙебеҙҙең Хоҙай һәм кешеләр алдындағы бурысты аңлау, киләсәк тураһында борсолмайынса, бөгөнгөгә ҡыуаныу.

**(Сенека).**

Хоҙай һөмһөҙ була алмай, юғиһә, ул бит кешене көлөү менән бүләкләмәҫ ине.

**(Сидней Харрис).**

Ғашиҡ кеше мотлаҡ ахмаҡлыҡтар ҡыла...

**(Гете).**

Бирәүҙәр һөйөү өсөн, икенселәр йәшәү өсөн яратылған.

**(Альберт Камю).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ярлы оҫтаның шундай ҡыҙыҡ ҡына ғәҙәте булған: оҫтаханаһында эшләп арығас, үҙенән алыҫ булмаған урында урынлашҡан бер хан һарайындай өйгә килеп, ихатаһына инеп, өйҙөң ишеген шаҡыған. Бай хужа күренеү менән, баш кейемен һалып, уға сәләм биргән дә, башҡа бер ни өндәшмәй, кире боролоп, ҡайтып киткән. Был хәл бик күп тапҡырҙар ҡабатланған.**

**- Һиңә минән ниҙер кәрәкме?- тип һораған берҙән-бер көндө бик нык аптыраған бай хужа. - Быны байтаҡтан алып һин минең йортом ишеген шаҡыйһың, тик бер ни ҙә өндәшмәйһең. Ниндәйҙер мохтажлығың булһа, әйт, хәл итергә тырышырмын...**

**- Рәхмәт әфәндем, - тигән оҫта. - Миңә һеҙҙән бер ни ҙә кәрәкмәй. Мин һеҙгә байҙар нисек йәшәй икәнен күрергә, һеҙҙең байлыҡҡа тамаша ҡылып, күңел йыуатырға ғына киләм. Быны беҙ, ярлы кешеләр генә эшләй алабыҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һеҙҙең кеүек бай кешеләр бындай күңел йыуатыуҙы тамашанан мәхрүм, сөнки һеҙҙең тирәлә бит тик ярлылар ғына йәшәй..."**

"Кiске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
8 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Кiске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Кiске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Кiске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3177
Заказ - 1733